БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ ИЛЕШ РАЙОНЫ МУНИЦИПАЛЬ РАЙОНЫНЫҢ ХАКИМИӘТЕ МУНИЦИПАЛЬ БЮДЖЕТ ДӨЙӨМ БЕЛЕМ БИРЕҮ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ ҮРГЕ ЙӘРКӘЙ 1-СЕ ГИМНАЗИЯҺЫ

Л.В.Фазлыева

# Башҡорт әҙәбиәтен уҡытыу тәжрибәһенән

## Уҡытыусыға ярҙамға



Үрге Йәркәй-2016

Башҡорт әҙәбиәтен уҡытыу тәжрибәһенән... Уҡытыусыға ярҙамға / Йыйынтыҡты төҙөүсе: Лилиә Валерий ҡыҙы Фазлыева, Илеш районы Үрге Йәркәйҙәге 1-се гимназияһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы. – Үрге Йәркәй: Илеш мәғлүмәт үҙәге редакция-нәшриәт комплексында баҫылды, 2016, 83 бит.

Үрге Йәркәй:  муниципаль бюджет дөйөм белем  биреү  учреждениеһы Үрге Йәркәй 1-се гимназияһы, 2016. - 83 бит. Уҡытыусының тәжрибәһенән тупланған был методик йыйынтыҡта үҫтереүсе уҡытыу системаһына нигеҙләнеп төҙөлгән дәрес, китап уҡыусылар конференцияһы өлгөләре, оҫталыҡ дәресе, фәнни-тикшеренеү, проект эше бирелде. Йыйынтыҡ йәш уҡытыусыларға, юғары уҡыу йорттарының башҡорт филологияһы факультеты студенттарына тәғәйенләнә.

# Баш һүҙ.



Уҡытыусы һөнәре борон-борондан изгеләрҙән һаналған. Бала күңеленә яҡшылыҡ, рәхимлелек, изгелек орлоҡтарын һалыусы, иңенә ҡанат ҡуйыусы, тормошта үҙ юлын, урынын табырға ярҙам итеүсе кеше ул – уҡытыусы. Бөгөн мәктәптәребеҙҙә тырыш, талапсан, үҙ эшенә етди ҡараған уҡытыусыларыбыҙ етерлек. Шундайҙарҙың береһе Илеш районы Үрге Йәркәй 1-се гимназияһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Фазлыева Лилиә Валерий ҡыҙы.

Бәләкәйҙән тормошта ауырлыҡтарға, ҡаршылыҡтарға бирешмәүсән, талапсан, үткер булып үҫә ул. Мәктәптә яҡшы билдәләргә генә уҡый. Әммә күңеленә иң яҡын дәрестәре шулай ҙа башҡорт теле һәм әҙәбиәте була. Үҙен белә-белгәндән китап уҡырға ярата, унһыҙ бер көн дә тора алмай. Айырыуса башҡорт яҙыусыларының әҫәрҙәрен бирелеп уҡый, дәрестән һуң мотлаҡ китапханаға инмәй ҡайтмай.

Үҙ һөнәренә, яратҡан эшенә, уҡыусыларына ҡарата талапсан, тырыш, инициативалы. Күҙҙәренән һәр ваҡыт энергия, аҡыл, түҙемлек балҡый. Коллегалары, ата – әсәләр алдында абруй яулаған, һәр саҡ ярҙам ҡулы һуҙыр, кәңәштәр бирер уҡытыусы ул. Уҡыусылары район, ҡала, республика кимәлендә уҙғарылған төрлө сараларҙа тик призлы урындарҙы ғына яулайҙар.

Туған тел һәм әҙәбиәт дәрестәрендә белем биреү менән бер рәттән милли үҙаң, фекерләү ҡеүәһе һәм ижади һәләттәрҙе үҫтереүҙе, рухи - әхлаҡи, патриотик, һәм, иң мөһиме, һәр яҡтан тулы үҫеш алған шәхес тәрбиәләүҙе төп маҡсат итеп ҡуя.

Һәр баланың шәхси һәләттәрен үҫтереп ҙур тормошҡа әҙерләү бурыстарын да күҙ уңынан ысҡындырмай. “Һәр бала - талантлы шәхес, тик уны ваҡытында күреп үҫтерергә, киңәйтергә кәрәк”,- тип әйтә Лилиә Валерий ҡыҙы. Бөгөн уҡыу-уҡытыу процессына яңы технологияларҙы ҡулланыу – уҡытыусы алдында торған төп талап. Замана менән бергә атларға тырыша. Шуға ла заман уҡытыусыһы булыу, уҡыусыларҙа үҙ фәненә ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу, уларҙың иғтибарын йәлеп итеү өсөн, төрлө ысулдар уйлап таба, яңы технологияларҙы үҙләштерә һәм уларҙы уҡытыу процессында киң ҡуллана.

Шундай талантлы, алдынғы ҡарашлы уҡытыусы менән бер гимназияла эшләүемә бик шатмын.

Үрге Йәркәй 1-се гимназияһының
башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Ризуанова Светлана Сәлихйән ҡыҙы

# Әҙәбиәт – ул изгелек донъяһы

“Һүҙ ҡөҙрәте, әҙәбиәт байлығы... Эйе, кешелек ҡағыҙға баҫылған китаптарҙан баш тарткан да кеүек. Шулай ҙа әҙәм балаһының барлыҡҡа килтергән иң бөйөк рухи хазиналарының береһе – бөйөк әҙәбиәт – ул мәңгелек...”, - тип яҙған Рәсәй президенты Владимир Путин.

Йәмғиәт күренеше булараҡ, әҙәбиәткә мөрәжәғәт итеү кәрәк, тәжрибә һәм мәҙәниәтлелек тупланған дәүерҙәр тәжрибәле һәм мәҙәниәтле. Әҙәбиәт дәресендә тәкдим ителгән материалды үҙләштереү, матур әҙәбиәтте күҙаллау күбеһенсә уҡытыусынан тора.

Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, күп кенә быуындар өсөн нигеҙ булып торған идеалдар, дөйөм кешелек ҡиммәте тураһындағы төшөнсәне хәҙерге заман мәктәп уҡыусылары юғалтып бара. Яҡшыны ямандан айырмайынса, ниндәйҙер модалы күренеште бала йыш ҡына өлгө итеп ала. Әммә быңдай процестың аҙағы балаларҙың тупаҫ, мәғәнәһеҙ ҡатылығына килтерә. Шуның өсөн әҙәбиәтте уҡытыуҙың маҡсаты дәрестә гуманлы идеалдарҙы хөрмәт иткән мәҙәниәтле, әхлаҡлы шәхесте тәрбиәләү, тип уйлайым. Был маҡсатка ирешеү аралашыусан, әхлаҡи- рухлы һәм башҡа мәсьәләләрҙең хәл ителеүенә, уларҙың берҙәмлегенә бәйле. Бөтә күп һанлы төрлө уҡытыуҙағы тәрбиәүи мәсьәләләрҙең, минеңсә, иң мөһиме түбәндәгеләр:

1. Уҡыусыларҙың әхлаҡи- рухи ҡиммәттәрен тәрбиәләү, гуманлы йәмғиәттең йәшәү ҡанундары һәм үҫешен өйрәнеү.
2. Уның теләһә ниндәй тормош этабында телмәр компетентлығын камиллаштырыу.
3. Уҡыусыларҙың ижади потенциялын ғәмәлләштереү, әҙәбиәткә өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу үҫтереүгә булышлыҡ итеү.

Был мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә дәүерҙәр буйына тәжрибә һәм мәҙәниәт туплаған, йәмғиәт күренеше булараҡ, әҙәбиәткә мөрәжәғәт итеү кәрәк. Бынан башҡа, әҙәбиәт уҡыусыларҙың үҙ

үҫешенә, донъяны танып белеүенә булышлыҡ итә.Үҙемдең эшемдә уҡытыу аша тәрбиәләү, шәхестең бөтә яҡлап үҫеше, үҙ аллы фекерләүсе кеше булыуын өҫтөнлөклө мөһим һорау итеп ҡуям.

Әҙәбиәт дәрестәре, әҙәби әҫәрҙәр аша бала шәхесен рухи байытыу проблемаһы өҫтөндәге уҡытыусының эше- ул перспективалы процесс, сөнки художестволы образ әхлаҡ, философик, психологик, сәйәси төшөнсәләр менән бәйле.

Шулай итеп, әҙәбиәт фән булараҡ, кеше шәхесенең бөтә яғына ла йоғонто яһай ала һәм кешенең эске рухи донъяһын байытыуға хеҙмәт итә.

Ә әҙәбиәт дәрестәре — әҙәмде әҙәм иткән, әҙәмде күркәм иткәне ул. Әҙәмде әҙәм иткәне – әҙәп, әҙәмде күркәм иткәне – күркәм ҡылыҡ. Ә ошо сифаттарҙы тик әҙәбиәт тәрбиәләй.

Лилиә Фазлыева

Ғилем өләшкәндән кәмемәй, арта ғына бара. (Р.Фәхретдинов)

---

**Оҫталыҡ дәресе**

**Тема: Үҙегеҙ үлгәс тә донъяла исемегеҙ ҡалырлыҡ итеп йәшәгеҙ.**

**Фәрит Иҫәнғолов.**

**Маҡсат:** Телмәр үҫтереүҙе формалаштырыу, ижади һәләтте үҫтереү, ижад вәкилдәренең тормошона, эшмәкәрлегенә ҡыҙыҡһыныу уятыу, алған белемде, мәғлүмәтте дөрөҫ итеп иҫтә ҡалдырырға өйрәтеү, йәшәүҙең мәғәнәһенә иғтибарҙы йүнәлтеү, эстетик зауыҡты үҫтереү.

**Йыһаздар һәм материалдар:** проектор, ноутбук, кластер, ҡом сәғәте.

**Метод һәм алымдар:** әңгәмә, яҙыусыларҙың һәм шағирҙарҙың биографияларын иҫтә ҡалдырыр өсөн алымдар, кластер төҙөү.

**Үткәреү формаһы:** оҫталыҡ дәресе.

**Эпиграф:**

Мәңге йәшәү бирелмәгән кешеләргә,
Тыуғанһың икән, тейешһең бер үлергә.
Тик шуныһы: бераү матур эҙ ҡалдыра,
Ә икенсе – ғүмерен бушҡа уҙғара.
Рәсих Ханнанов

Оҫталыҡ дәресенең барышы:

- Беҙҙең тормош йылдар, айҙар, көндәр ағышынан ғына тормай, ә минут һәм секундтарҙан тора. Нимә ул хәтер? Кәрәкме ул?

Яҡынса яуап:

Хәтер – үткәндәге ваҡиғаларҙы, эмоцияларҙы күңелдә һаҡлай алыу мөмкинселеге. Бәхетле миҙгелдәр ҡыҫҡа, ә хәтер беҙгә уларҙы ваҡыт аралығында тикшереп ҡарарға мөмкинселек бирә. Беҙ үпкәләү, ҡайғы, ҡурҡыу кеүек хистәрҙе хәтерҙең һаҡлауы менән дә йәшәйбеҙ. Шуға ла уны "хәтер һандығы" тип

атайбыҙ. Тормоштоң гүзәллеге, матурлығы ана шул күп төрлө булыуында. Хәтер беҙгә бик тә кәрәк.
- Был фекер менән һеҙ килешәһегеҙме?
1. Йәмғиәттә кеше : ҡом сәғәтендәге ҡом бөртөгө.
2. Йәшәү – ғүмер ағышы (фекерҙәр дәлилләнә).
- Кеше ни өсөн йәшәй?
Яҡынса яуаптар:
(Тормошҡа шатланыу өсөн. Уңышҡа ирешеү өсөн. Ғаилә ҡороп, балалар үҫтереү өсөн. Белем алыу, һөнәрле булыу өсөн. Күп аҡса эшләү өсөн).

Мин уйлауымса һәр кешенән һуң ниндәй ҙә булһа эҙ ҡалырға тейеш. Был яҡтан, әлбиттә беҙҙең күренекле яҙыусыларыбыҙ, шағирҙарыбыҙ отошло позицияла. Сөнки беҙ яҡындан уларҙың биографиялары, тормош юлдары һәм ижадтары менән танышабыҙ. Танышыу ғына аҙ, беҙҙең, әҙәбиәт уҡытыусыларының, төп бурыстары биографик белешмә биреү генә түгел, ә уны тейешле кимәлдә уҡыусыларға еткереү, ҡыҙыҡһыныу уятыу һәм төрлө ысулдар менән иҫтә ҡалдырыу өсөн булышлыҡ итеү.
- Әҙиптәрҙең тормош һәм ижад юлын хәтерҙә ҡалдырыр өсөн ниндәй ысулдарҙы ҡулланып була икән? Ошо һорауға яуап бирер өсөн кластерҙар төҙөп ҡарайыҡ.
- Нимә ул кластер? Соединение - бәйләнеш. Бер тема буйынса йыйналған элементтар.
Мәҫәлән:
- Шағирҙың йәки яҙыусының биографияһын өйрәнгәндә ниндәй методтар, алымдар, йыһаздар, материалдар ҡуллана алабыҙ?
(Һәр береһе үҙаллы кластер төҙөй).
Биография
1. Портрет.
2. Даталар.
3. Исем, фамилияның мәғәнәләре.
4. Географик атамалар.
5. Донъя күргән китаптарының исемдәре.
6. Китаптар күргәҙмәһе.

7. Иҫтәлектәр.
8. Бағышлауҙар.
9. Тәнҡит мәҡәләләре.
10. Презентация.
11. Хронологик таблица.
12. Исемде мәңгеләштереүсе саралар.
13. Алған белемде тест ярҙамында нығытыу.

Бөгөн беҙ Һәҙиә Дәүләтшинаның биографияһы менән танышып уны иҫтә ҡалдырырға тырышырбыҙ. Был кешене белмәгән, уның ҡаһарман ғүмеренә һоҡланмаған, уға ҡайнар ғашиҡ булмаған кеше юҡтыр беҙҙең республикала. Һеҙ ҙә был исемде тәүге тапҡыр ишетмәйһегеҙ, уның ҡайһы бер әҫәрҙәре менән танышһығыҙ - “Айбикә”, “Ырғыҙ”, “Пионерка Һылыуҡай”.

Һәҙиә Дәүләтшинаға
Ауылыңда булдым, Һәҙиә апай,
Ҡырҙарыңды һинең ҡыҙырҙым.
Хас та беҙҙең ауыл һинең Хәсән,
Хас Урғаҙа инде Ырғыҙың.
Баланлы ла булдым. Романың бит
Шул йәйләүҙәр менән башлана.
Тәбиғәтең һаман шундай гүзәл,
Шишмәләрең шундай татлылар.
Яҡташтарың бик ҡунаҡсыл икән,
Һинең кеүек яҡын, мөләйем.
Һәр аҙымың һинең һағыналар,
Тик һин генә быны белмәйһең.
Халыҡ һине һөйә, үҙ ҡыҙым тип,
Халҡыңа һин хеҙмәт иткәнгә.
Бик бәхетлеһең, Һәҙиә апай,
Йөрәк һүҙең уға еткәнгә.

Рәйсә Үҙәнбаева – башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы. Яковлевка ауылы, 1989 йыл.

Күркәм Ырғыҙ йылғаһының башында Хәсән ауылында ярлы крәҫтиән Лотфулла Ильясов ғаиләһендә ҡыҙ бала донъяға

ауаҙ һала. Ата-әсәһе уға Һәҙиә тип исем ҡуша. Һәҙиә ғәрәп телендә “бүләк” тигән һүҙ. Улар үҙҙәренең был сибәр һәм ғәйрәтле ҡыҙҙарының халыҡҡа бөйөк бүләк буласағын белделәрме икән?… Кескәй Һәҙиәне Салауат Юлаев исемендәге мәртәбәле премияға лайыҡ булған бөйөк яҙыусы Һәҙиә Дәүләтшина итеп үрләткән ҡаһарманлыҡҡа юл ҡайҙан башлана икән?

Һәҙиә Лотфулла ҡыҙы Дәүләтшина Һамар өлкәһе Хәсән ауылында тыуа. Ул зирәк аҡыллы һәм теремек бала булып үҫә. Кескәй сағынан өләсәһенең тылсымлы әкиәттәрен тыңларға ярата. Ун биш йәшендә тиф ауырыуынан атаһы донъя ҡуя, әсәһе һаңғырауланып ҡала. Һәҙиә үҙен ғаилә башлығы булырға тейешлеген аңлай һәм Диңгеҙбай ауылында уҡыта башлай. Ун ете йәшендә Ғөбәй Дәүләтшинға кейәүгә сыға. Ғаилә альбомдарынан күренеүенсә улар егерменсе йылдан уҡ таныш булалар. Егерме өсөнсө йылда улдары Булат тыуа. Әммә аяныслы яҙмыш ун айлыҡ сабыйҙың ғүмерен өҙә. Бүтән уларҙың балалары булмай. Әсәһен, Гөлйәүһәр апайҙы Дәүләтшиндар гел үҙҙәре менән йөрөтәләр. Төрмәлә ултырған ваҡытында әсәһе квартираларының кухняһында йәшәп, ҡыҙын, үҙе әйтеүенсә “күҙ нурын”, көтөп ала. Ә Һәҙиә Мордовия төрмәһенән бөтә һаулығын юғалтып, күкрәгенән ҡан төкөрөп ҡайта. Унда хеҙмәтен 300% процентҡа арттырып үтәп, өҫтәмә паек алып, уны бала-сағаға өләшә. Лагерҙа улар ирҙәр күлдәге яғаһын, ашъяулыҡ һәм башҡа әйберҙәр сиккән. “Книга отличника” ла алып ҡайта ул Сталин лагерынан. Ниндәй миҙалдар тағып ҡайтһаң да төрмә төрмә булып ҡала инде ул.

Биш йыл үткәс, Һ. Дәүләтшина Өфөгә ҡайта. Әммә әсәһе эргәһендә бер генә тәүлек тора ала, Стәрлетамаҡҡа китергә мәжбүр була. Унда сауҙа бүлегенә надомница булып урынлаша. Ике йыл үтә. Үпкә сире көсәйгәндән-көсәйә. Өфөлә ваҡытлыса йәшәргә рөхсәт бирелә. Ауыл хужалығы ғилми-тәжрибә станцияһында төнгө ҡарауылсы булып эшләй башлай. Төндәр буйы романын яҙа.

1945 йылда еҙнә тейешле кешеһе булған Зәйнулла Сафинға кейәүгә сыға, бергәләп уның етенселә уҡыған ҡыҙын

тәрбиәләп оло тормош юлына сығаралар. Улар Силәбе өлкәһендәге Сулея станцияһында йәшәйҙәр, һуңынан, 1951йылда Бөрө ҡалаһына күсенеп киләләр.

Күренеүенсә Һәҙиә Дәүләтшинаның ғүмере еңел булмаған, әммә унын ихтыяры һынмаған, сәләмәтлеге ҡаҡшаһа ла, рухы ҡоростай ныҡ булған.

Халыҡтың ғәйепһеҙгә ғәйепләнеп, йәшәгән саҡтарында фажиғәле яҙмышҡа дусар ителгән, үлгәс исемдәрен дә әйтеү тыйылған батыр йөрәкле ул һәм ҡыҙҙарының тормош юлдарын, эшмәкәрлеген яҡшы итеп өйрәнеп, кире халыҡҡа ҡайтарыу эше менән шөғөлләнеүселәрҙең ҡыйыу аҙымына һоҡланаһы ғына ҡала. Был да бит үҙе батырлыҡ! Илдә барған үҙгәреш, заман быңдай ҡыйыулыҡты быумаһа, туҡтатмаһа ине. Өмөтөбөҙ ҙур беҙҙең.

Һ.Дәүләтшинаның ижады, ғүмере – бөйөк ҡаһарманлыҡ ул. Был аянысл яҙмыштың ҡайһылыр биттәрен генә ҡарап сыҡтыҡ, улар күңелде, йөрәкте, зиһенде ҡуҙғатты, төрлө уйҙар диңгеҙенә алып китте.

Хөрмәтле коллегалар, ә хәҙер дәрестә алған белемдәребеҙҙе тикшереп ҡарайыҡ, минең биографияны иҫтә ҡалдырыу методы хәтер һандығығыҙҙа ниндәй мәғлүмәттәр ҡалдырҙы икән? Бының өсөн слайдта тест һорауҙары сығарам һеҙ уларға яуап биреп ҡарағыҙ (Тест).

Дәресемде ихлас күңелдән тыңлап, өйрәнеп ултырыуығыҙға ҙур рәхмәт. Хәтерегеҙ ҙә бик һәйбәт икәнен асыҡланыҡ. Хәтер – көршәккә төйгөсләп тултырып, ергә күмелгән хазина менән бер ул. Ҡайһы саҡта уны зарығып эҙләһәң дә таба алмай интегәһең, ә ҡайһы саҡта ул үҙенән-үҙе ҡалҡып сыға ла һинең күк көмбәҙеңде таң йондоҙолай яҡтыртып ебәрә. Һәр ваҡытта таң йондоҙолай яҡтылыҡ, нур сәсеп йәшәгеҙ. Сөнки уҡытыусы тарихты яңырта, үткәндәргә йән өрә, бөгөнгөлә – аңдарҙы яҡтырта, киләсәккә аҡ нур күрһәтә. Уңыштар һеҙгә!!!

# Дәрес – уҡытыу процесының тере бер күҙәнәге ул...

## Ноғман Мусиндың “Һунарсы хикәйәләре”нә ингән әҫәрҙәре буйынса йомғаҡлау дәрес( 4-се класс)

**Тема:** Ноғман Мусиндың “Һунарсы хикәйәләре”нә ингән әҫәрҙәре буйынса йомғаҡлау дәрес.
**Маҡсат:** Кескәй уҡыусыларҙы ғаләмдең, тәбиғәттең төрлө яҡтары менән таныштырыу; кешеләрҙең тәбиғәткә һәм бер-береһенең мөнәсәбәтенә ҡағылған әхлаҡи проблемаларҙы күтәреү; хикәйәләрҙә хайуандарҙың, үҫемлектәрҙең насар кешеләрҙән күргән йәберҙәрен уларҙың кисерештәре аша күрһәтеү, балаларҙың тойғоһона тәьҫир итеү һәм тәбиғәткә һаҡсыл, мәрхәмәтле мөнәсәбәт тәрбиәләү.
**Йыһазландырыу:** Н.Мусиндың портреты; кейектәр төшөрөлгән слайдтар, башҡорт теленең һүҙлеге, әҫәр буйынса төшөрөлгән һүрәттәр; Н.Мусин китаптарынан күргәҙмә; плакаттарҙа бөйөк шәхестәрҙең мәртәбәле һүҙҙәре: “Урман күрке – йәнлек” (Ҡ.Аралбай)
“Тәбиғәтте һаҡлау – үҙ-үҙебеҙҙе яҡлау ул.” (Ғәбит Садиҡов)
“Тәбиғәттең беҙгә биргән бүләктәре хисапһыҙ.
Ә беҙҙән ул бер генә нәмә һорай – һөйөү” (Шамил Анаҡ)
“Тәбиғәттең ҡағиҙәһе ябай,
Ҡайһы берҙә унын сере юҡ:
Бөрөң ҡатһа, тамыр ниңә кәрәк?
Тамыр кипһә, ярылыр бөрө юҡ”. (Рауил Бикбаев)

**Дәрескә эпиграф:** Мин түгел тик тере бер һүрәт,
Мин бит һеҙгә тормош, тәғлимәт.
Шәфҡәт, байлыҡ – йомарт йәнемдә.
Миһырбанлыҡ ҡына һин күрһәт:
Барын бирәм – мин бит тәбиғәт!
Риф Мифтахов.

Дәрес барышы

1. Психолгик инеш.

Һаумыһығыҙ, уҡыусылар, кәйефтәрегеҙ нисек?

2. Белемдәрҙе актуалләштереү.

( “Йәнлектәр донъяһында” тапшырыуының көйө яңғырай).

-Был көйҙө һеҙҙең ниндәй тапшырыу ҡарағанда ишеткәнегеҙ бар?

-Был көйҙө тыңлағанда һеҙҙең күҙ алдына нимәләр килә?

-Ни өсөн был көй бөгөн яңғырай? (яуаптар).

3. Уңыш ситуацияһын ойоштороу. Өйгә эште тикшереү.

-Уҡыусылар беҙ һеҙҙең менән кемдең ижадын өйрәндек?

- Ниндәй хикәйәләр менән танышып үттек?

Ә өйҙә һеҙгә үҙегеҙгә хикәйә яҙып ҡарарға тәкдим ителгәйне (уҡыусылар, өйгә бирелгән, йәнлектәр тураһындағы хикәйәләрен уҡып ишеттерәләр).

4. Теманы актуалләштереү. Уҡыу мәсьәләһен ҡуйыу.Таҡтаға яҙылған эпиграф, мәртәбәле һүҙҙәр менән таныштырыу һәм уларҙың мәғәнәләрен асыҡлау.

5. Уҡыу мәсьәләһен хәл итеү.

Инеш һүҙ. Эйе тәбиғәт – ул әсә, тәбиғәт – ул мәңгелек. Тәбиғәтһеҙ кешегә һәм тереклеккә йәшәү юҡ. Ябай ғына итеп әйткәндә, тәбиғәт һулаған һауабыҙ, эскән һыуыбыҙ, беҙҙе туйындырған тупрағыбыҙ, шул тупраҡта, үҫкән ағастар, емештәр һоҡланғыс гөл-сәскәләр, төрлө -төрлө ҡоштар, йәнлектәр…

Беҙ һеҙҙең менән, уҡыусылар, башҡорт халыҡ яҙыусыһы Ноғман Мусин ижады менән яҡындан танышып үттек һәм киләсәктә лә танышыуҙы дауам итәсәкбеҙ, бына бөгөн уның әҫәрҙәре буйынса йомғаҡлау дәрес. Әҙиптең хикәйәләрендә беҙ мауыҡтырғыс тәбиғәт күренештәрен, йәнлектәр донъяһын астыҡ. Ниндәй генә ҡыр йәнлектәре, ҡырағай хайуандар юҡ унда, йәгеҙ әле, бөтәһен дә һанап китәйек (айыу, ғорур мышы, һөйкөмлө болан, ҡанһыҙ бүре, зыянһыҙ һуҫар, һаҡһыҙ ҡоралайҙар). Яҙыусының бөтә хикәйәләрен уҡып, һанай китһәң, барлыҡ урман кейектәренең исемдәрен теҙеп сығырға тура килер ине бында…

Ә уйлап ҡараһаң, быны белеү бик тә файҙалы бит. Беҙ бөгөн дүрт әҫәргә байҡау яһарбыҙ, үтелгәндәрҙе иҫкә алырбыҙ. Һәр бер әҫәрҙә ниндәй ҙә булһа бер йәнлек тураһында һүҙ бара:
“Етемәк болан балаһы” – болан;
“Ҡарағай башында бер төн”- айыу;
“Татлы тамаҡ һуҫар” – һуҫар;
“Ҡоралайҙар” – ҡоралай.
(Башҡорт теленең һүҙлегенән йәнлектәр тураһындағы аңлатмалар менән танышыу һәм автор тасуирлауҙары менән сағыштырыу).

Беҙҙең Илеш районы урмандарында, әлбиттә, боландар , айыуҙар юҡ, әммә ләкин районыбыҙҙың өлкән һунарсыһы әйтеүе буйынса 5-6 йылға бер айыуҙар аҙашып килеп сыҡҡылайҙар, ти. Урмандарҙа һуҫарҙарҙың да барлығын иҫбатлай. Ә бына ҡоралайҙар Башҡортостандың ҡыҙыл китабына ингәндәр һәм беҙҙең районда ете йыл элек тик бишәү генә булһалар, бөгөнгө көндә уларҙың һаны күпкә артҡан, уларҙы Ҡарабаш урманында осратырға мөмкин.
Һорау ҡуйыу: “ Нимә ул “Ҡыҙыл китап” һәм “Ҡара китап“ ?”
Интернет селтәре аша уҡыусылар тарафынан ҡуйылған һорауға яуап табыу.

Ошо яңылыҡтарҙан һуң мин һеҙгә йәнлектәр атласынан алынған слайдтар күрһәтеп китәһем килә. Бәлки уларҙы күргәндән һуң һеҙ әҫәрҙәрҙе тәрәнерәк кисереп, тоя башларһығыҙ.
Хикәйәләр йөкмәткеһе өҫтөндә эш.
(Таҡталағы балалар эшләгән һүрәттәргә күҙ һалабыҙ)

“Етемәк болан балаһы”
“Ҡарағай башында бер төн”

“Татлы тамаҡ һуҫар”
“Ҡоралайҙар”

Хикәйәләрҙе уҡығандан һуң һорауҙар күп тыуа, һәр береһенә ентекләберәк туҡталайыҡ. Кем исеменән һүҙ алып

барыла һәм улар ниндәй йыйынтыҡҡа ингән? Уҡыусыларҙың яуаптары (Хикәйәләр  Абделнәғим бабай исеменән алып барыла, “Һунарсы хикәйәләре” йыйынтығына ингән).
“Етемәк болан балаһы” әҫәре. Хикәйәлә быҙау сағынан үк етем ҡалған Күксә ҡушаматлы болан балаһының яҙмышы, уның кешеләр араһында үҫеүе тасуирлана.
- Күксә нисек етем ҡала? (Уҡыусыларҙан яуап алыу).
Бүреләр талап үлтергән боландың быҙауын мәрхәмәтле кешеләр ауылға алып ҡайтып үҫтерәләр, Күксә тип исем дә ҡушалар. Кешеләргә эйәләшкән, ҡулға өйрәнгән малҡай ниндәй булып үҫә? (Бик матур, көслө, һомғол кәүҙәле болан булып үҫә).
-Уның яҙмышы ниндәй?(Яуаптар алыу).

Эйе, уның артабанғы яҙмышы инәһенекенә ҡарағанда ла фажиғәлерәк тамамлана. Әгәр инә боланды урманда йыртҡыс бүреләр тамаҡлаһа, ауылда бүреләрҙәй үк йыртҡыс, йәнһеҙ әҙәмдәр етемәк боландың башына етә - Күксәне нимә эшләтәләр? ( Урлап һуйып ашайҙар).

Беҙҙең районда ла яуыз кеше ҡулынан бер йылды аҡҡоштар үлде. Ап-аҡ матур ҡоштарҙы беҙҙең Үрге Йәркәй эргәһендә атып үлтерҙеләр, шунан бирле улар беҙҙең яҡта хәҙер күренмәйҙәр ине. Бына бер нисә йыл рәттән Түбәнге Йәркәйҙең күлендә барлыҡҡа килделәр. Тимәк, уҡыусылар беҙҙең арала ла “Етемәк болан балаһы” хикәйәһендәге кеүек миһырбанһыҙ кешеләр бик күп осрай.

Шулай итеп, яҙыусы Ноғман Мусин ағай хикәйәһендә болан яҙмышы аша беҙҙең йәмғиәтебеҙҙәге кире күренештәрҙе лә фашлай. Изгелектең һәм яуызлыҡтың бер тирәлә, хатта йәнәш кенә булыуҙарын иҫкәртә, һағыраҡ, уяуыраҡ булырға саҡыра.

-Нимә һуң ул, уҡыусылар, яуызлыҡ һәм изгелек? (Яуаптар алыу).
Изге күңелле кешеләр, йәнлектәргә - тәбиғәт балаларына (беҙҙең яҡын дуҫтарыбыҙға) яҡшылыҡ күрһәтеүселәр күберәк, барыбер. Был турала беҙ һеҙҙең менән “Коралайҙар” хикәйәһенән сығып инандыҡ. Ҡышын буранда бауыр аҫтынан ҡалын ҡарлы төбәктә бикләнеп ҡалған был матур кейектәрҙе Әбделнәғим бабайҙың ҡыш буйы ҡарап, һаҡлап сығыуы әҙәмдәге кешелеклелек, күңел

бөйөклөгө, изгелек сифаттарының асыҡ сағылышы түгелме, уҡыусылар?

- Был хикәйәлә Әбделнәғим бабай ҡоралайҙарҙы нисегерәк тасуирлай?
- Ҡышын ҡоралайҙарға ниндәй мәшәҡәттәр тыуа?
- Уларға ярҙам итер өсөн нимәләр эшләргә кәрәк?

Шуныһы ҡыҙыҡлы был хикәйәләрҙә, әҫәрҙәрҙең күпселеге үҙ ғүмерендә күпте күргән, күпте кисергән, аҡыл – тәжрибә туплаған Әбделнәғим бабай ауыҙынан һөйләтелә. Бына шуғалыр ҙа һунарсы хикәйәләре ышандыра, тиҙ мауыҡтыра, һөйләнгән һәр бер ваҡиға йәнле рәүештә күҙ алдына килә.
Ә был, уҡыусылар, нимәнән тип уйлайһығыҙ?
Эйе, һунарсы һөйләгән ваҡиғалар тормошсан, кеше ышанырлыҡ. Миҫалға “Ҡарағай башында бер төн” хикәйәһен алайыҡ.
-Уҡыусылар, һөйләп үтегеҙ әле унда нимә тураһында һүҙ бара?
-Айыу менән осрашҡан кешегә ниндәй кәңәш бирер инегеҙ?
-Ни өсөн бабай айыуҙарҙы “аҡыллы” тип әйтә?
Дөрөҫ, уйлап ҡараһаң кеше ышанмаҫлыҡ хәл, әммә хикәйәлә ниндәйҙер ышандырғыс көс бар – ул яҙыусының оҫталығында, уның тасуири тел байлығында.

Дүртенсе хикәйәгә лә килеп еттек - “Татлы тамаҡ һуҫар”. Хикәйәне уҡығанда бәлки һуҫарҙы күҙ алдына ла килтерә алмағанһығыҙҙыр. Бөгөн беҙ һеҙҙең менән уны һүрәттә лә күрҙек, слайд та ла күрҙек. Әҫәр йөкмәткеһе аша беҙ беләбеҙ - ул шаян, иң матур, үҙенә күрә иң уҫал йәнлек.
-Уҡыусылар, уны нимә менән тоталар? (Көрәк һәм балта).
-Ҡайҙарҙа һуҫарҙар йәшәй? (Тороҡ йә ергә йығылған ағас ҡыуышы).
-Тотҡанда һуҫарҙың тиреһенә нимә тейгән була? (Бал).
-Солоҡ балын нисек эҙләп табып була? (Ағас ҡыуыштарынан).
-Ни өсөн һуҫарға автор “тәмле тамаҡ” тип исем ҡушҡан?

-Уҡыусылар, дәресебеҙ һеҙгә оҡшанымы, ниндәй яңылыҡтар үҙегеҙгә астығыҙ?
-Әҫәрҙәрҙе уҡығанда нимәләр кисерҙегеҙ? (Яуаптар алыу).
6. Ял минуты.

Әйҙә һыуға төшәйек,
Балыҡ кеүек йөҙәйек,
Йөҙөп, йөҙөп арыныҡ,
Ҡоро ергә сығайыҡ,
Болан кеүек сабайыҡ,
Йылан кеүек шыуайыҡ,
Терпе кеүек боҫайыҡ,
Шым ғына ултырайыҡ.

7. Ғәмәли эш.

Ә хәҙер уҡыусылар дүрткә бүленәйек тә ижади эш эшләп алайыҡ. Дүрт командаға дүрт хикәйә. Хәҙер уйланып алығыҙ, һеҙ автор булһағыҙ нисек итеп уларҙы тамамлар инегеҙ, ниндәй яңылыҡтар индерер инегеҙ? (Командаларҙың үҙаллы эше. Эштәрҙе тикшереү).

Кемгә ниндәй хикәйә ныҒыраҡ оҡшаны? Таҡтала һеҙ әҫәрҙәрҙән һүрәттәр күрәһегеҙ, ҡайһы әҫәр өсөн һеҙ үҙегеҙҙең тауышығыҙҙы бирер инегеҙ? (Уҡыусылар сығып тауыш бирәләр).

8. Йомғаҡлау. Баһалау.

-Һеҙгә ниндәй эштәр оҡшаны?
-Кейектәр тураһында нимә белдек?
-Ноғман Мусин хаҡында нимәләр әйтә алаһығыҙ?

(Алдан әҙерләнгән уҡыусы һөйләй) Ноғман Мусин – халҡыбыҙ яратып уҡыған бик күп әҫәрҙәрҙең авторы. Ул Урал тәбиғәтенең иҫ киткес гүзәллеген, байлығын, башҡорт урмандарының яҙмышын беҙгә еткерә. Ҙур оҫталыҡ менән экологик проблеманы күтәреп сыға. "Һунарсы хикәйәләре"ндә лә яҙыусы үҙенә тоғро ҡала: оҫта хикәйәсе лә ул, бик нескә тойғоло, һиҙгер күңелле, тапҡыр һәм һынсыл ҡарашлы рәссам да.

Уҡыусылар миҫал өсөн бына "Ҡоралайҙар" хикәйәһендә бер абзацты уҡып ҡарайыҡ. Нисек оҫта һәм һоҡланғыс итеп тасуирлай яҙыусы урмандың был тере биҙәген (уҡыусы текстан өҙөктө тасуири уҡып ишеттерә):

"…Әбделнәғим бабай, минең үтенеүле ҡарашымды күреп, һөйләргә тотона.

- Насип булһа, бер осрарҙар әле, үҙеңә лә күрһәтермен ул урман күркен, йәме. Күрке, тим, сөнки улар матур ҙа, бер зыяндары ла юҡ мәхлүктәреңдең. Ашағандыры – үлән, эскәндәре – таҙа һыу. Шуға ла уларҙың аяҡтары еҙ ҡурай кеүек нәфис, баштары ҡупшы. Ә күҙҙәренә яҡынданыраҡ ҡараһаң, сабый бала ҡарашымы ни – һис ниндәй усаллыҡ, яһилыҡ юҡ. Әйтерһең, тик миңә теймә, әҙәм балаһы, минең бер зыяным да юҡ бит һеҙгә, тип тора”. (141-се бит)

Уҡытыусы һүҙе: Йомғаҡлап әйткәндә, яҙыусы Ноғман Мусин ағайҙың был хикәйәләре – кескәйҙәр өсөн дә, ололар өсөн дә бик фәһемле әҫәрҙәр. Уларҙың һәр береһе тыуған төйәгебеҙҙең ҡото ла, йәме лә, хатта беҙ йәшәгән ошо гүзәл еребеҙҙең айырылғыһыҙ бер өлөшө (кешеләрҙең үҙҙәре кеүек үк!) булған йән эйәләре – ҡыр-урман йәнлектәре хаҡында хәстәрлек күрергә, уларҙы һаҡларға саҡыра. Күңелдәребеҙҙә йәнлектәргә ҡарата миһырбанлыҡ, ихтирам, кешелеклелек тойғолары тәрбиәләй. Китаптағы Әбделнәғим олатай һымаҡ изгелекле, ярҙамсыл, иғтибарлы булһын ине бөтә кешеләр ҙә. Ҡаты бәғерле булмаһындар ине, тигән теләктәрҙә ҡалайыҡ уҡыусылар..

9. Өйгә эш. Ошо хикәйәләр өсөн рәхмәт һүҙе әйтеп Ноғман ағай Мусинға хат яҙырға.

## Туған телем – үҙ телем, ҡайҙа барһам – үҙ көнөм (5-се класта Баязит Бикбай ижадын өйрәнеү)

**Дәрес темаһы**

“Тыуған телем – үҙ телем, ҡайҙа барһам үҙ көнөм”

**Маҡсат:** Б.Бикбайҙың тормошо һәм ижады менән таныштырыу; тыуған илгә, туған телгә ихтирам тәрбиәләү; шиғыр йөкмәткеһен үҙләштереү; поэтик телмәрҙең мелодикаһына төшөндөрөү; сәнғәтле һөйләү, фекерләү һәләтен үҫтереү. Шағир ижадына мөхәббәт тәрбиәләү, милли хис уятыу.
**Йыһазландырыу:** Б.Бикбай портреты, шағир китаптарынан ойошторолған күргәҙмә; “Ижад йорто” һүрәте.

**Эпиграф:** Яҙмышыбыҙ – тел яҙмышы,
Беләм уның хаҡында.
Әгәр телем йәшәй икән,
Йәшәйәсәк халҡым да.
(Ирек Кинйәбулатов)

Дәрес барышы.

1. Ойоштороу мәле.

Хәйерле иртә уҡыусылар. Бөгөнгө дәрестә беҙ талантлы шағир, драматург, романист, либреттист Баязит Бикбайҙың ижады һәм тормош юлы менән танышырбыҙ, ”Ижад йорто”на сәйәхәт яһарбыҙ.

2. Төп өлөш.

Ижад йортобыҙҙың беренсе ҡаты – “Тормош юлы һәм ижады”.
Уҡытыусы. Бөгөнгө дәресебеҙҙе күренекле шағир Б.Бикбай ижадына бағышлайбыҙ. Дәрестең эпиграфының аҫылына төшөнәйек.
1-се уҡыусы. Баязит Бикбай (Баязит Ғаяз улы Бикбаев) 1909 йылдың 19 ғинуарында Башҡортостандың Күмертау районы,

Ҡалта ауылында уҡытыусы ғаиләһендә донъяға килә. Бәләкәйҙән үк уға олатаһы рус һәм башҡорт телендә уҡырға, яҙырға өйрәтә. 1923 йылда ун дүрт йәшендә Ырымбурҙағы башҡорт педтехникумына уҡырға керә, уны 1929 йылда тамамлап сыға. Үҙенең тәүге шиғырын башҡорт халыҡ йыры Буранбайға оҡшатып яҙа.

2-се уҡыусы. Ҡырҡ йыллыҡ ижади ғүмерендә Баязит Бикбай утыҙға яҡын китап баҫтырып сығара. 1937 йылдан алып Бикбай драматургия жанрында ла актив эшләй. “Ҡарлуғас”, “Салауат Юлаев” драмаларын ижад итә. Киң билдәле “Аҡсәскә” повесы донъя күрә. “Ҡоҙаса”, “Шәүрә”, “Замандаштар” опералары өсөн яҙған либреттолары киң танылыуға ирешә.

3-сө уҡыусы. Башҡорт әҙәбиәте һәм сәнғәте үҫешендәге ҙур хеҙмәттәре өсөн Баязит Бикбай “Почет билдәһе” (1939), Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән (1955) наградлана, уға Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре тигән почетлы исем бирелә. Б.Бикбай 1968 йылдың 2 сентябрендә вафат була. Ҙур талант эйәһе Б.Бикбайҙың культурабыҙға хеҙмәттәре өсөн, 1970 йылда уға Салауат Юлаев исемендәге республика премияһы бирелә.

Уҡытыусы. Уҡыусылар, беҙ һеҙҙең менән шағирҙең тормош һәм ижад юлынан йәнәш атлап ижад йортобыҙҙың икенсе ҡатына – “Шиғриәт яланына” менеп еттек. Бөгөн беҙ һеҙҙең менән үтеп сыҡҡыһыҙ йорттоң ике генә бүлмәһенә инербеҙ. (Бүлмәләрҙең исемдәре таҡтаға эленә).

“Туған тел” “Рус теле”

(Ике уҡыусы “Туған тел” , “Рус теле” шиғырҙарын яттан һөйләйҙәр).

“Туған тел” шиғыры эстәлеге өҫтөндә эш.

- Һүҙлек эше. Убалар үҫкән, тере шишмә, ғәзиз халҡым, халҡымдың хазинаһы, таҙа намыҫы һүҙбәйләнештәренең мәғәнәләрен асыҡлау.

- Шиғырҙың темаһын, төп фекерен, проблемаларын билдәләү, төп лирик геройҙы асыҡлау. Шиғыр буйынса һорауҙар:

1) “Туған телде ни өсөн хөрмәт итәбеҙ ?”
2) “Туған тел – халыҡтың бай хазинаһы” тигәнде нисек аңлайһығыҙ?
3) Тел тураһында тағы ниндәй әҫәрҙәр беләһегеҙ?
Уҡытыусы. Тел – уҡыусылар, беҙҙең йәшәйешебеҙ, телебеҙ булғанға беҙҙең илебеҙ бар. Илебеҙ беҙҙең һәр беребеҙҙең тупһаһынан башлана һәм Рәсәй менән тамамлана. Б.Бикбай үҙенең шиғырҙары менән ике телдең дә бөйөклөгөн һәм кәрәклеген күрһәтә. “Рус теле” шиғыры юлдарында беҙ милләттәр араһындағы дуҫлыҡты күрәбеҙ. Ни өсөн, уҡыусылар, шиғырҙа “Ер! Ут! Һыу! Һауа!..” һүҙҙәре ҡабатланып килә? (Уҡыусыларҙың яуаптары).
- Малайҙың дуҫтары күбәйеүгә нимә сәбәпсе була?(Яуапты шиғыр юлдарынан табып уҡырға).

Яҙма эш. Таҡтаға һүҙҙәр яҙыла:

| 1-се бағана | 2-се бағана |
|---|---|
| тел | ер |
| әсәй | ут |
| халыҡ | һыу |
| кеше | һауа |

Варианттарға бүленеп, таҡталағы һүҙҙәрҙе ҡулланып, уҡыусылар бәйләнешле хикәйә яҙалар. Был эш 3-5 минут эсендә башҡарыла. Уҡыусылар бер-береһенең эштәрен тикшереп баһалайҙар. Иң яҡшы тип танылған эштәрҙе класс алдында ҡысҡырып уҡыйҙар.

Ижад йортобыҙҙың “Мелодика“ бүлмәһенә лә рәхим итегеҙ!

Рифма - әҫәрҙең дөйөм йөкмәткеһе - пафосы, ритмикаһы һәм музыкаллеге менән мөнәсәбәткә инә торған ҡатмарлы күренеш. Шиғыр юлдарында бер үк өндәрҙең йыш ҡабатланыуы поэтик телмәрҙең мелодикаһына төшөнөргә, шиғырҙың эске ритмын һәм рифмаһын барлыҡҡа килтереүгә, әҫәрҙең йөкмәткеһен тәрәнерәк, тулыраҡ ҡабул итеүгә булышлыҡ итә. Хәҙер шиғырҙарҙы йәнәш ҡуйып тикшереп ҡарайыҡ.

“Туған тел” “Рус теле”

1) Ике шиғырҙа ла һуҙынҡы өндәр өҫтөнлөк итә. Шуның өсөн, күрәһең, улар йомшаҡ, яғымлы, тыныс итеп уҡыла (Ижади уҡыу).

2) Ябыҡ рифма — Асыҡ рифма

3) Ябай рифма — Ябай рифма

Күреүегеҙсә шиғырҙарҙа өндәр ҡабатланып килә, улар шиғырҙың тәьҫир көсөн, сәнғәтсә яңғырауын тәьмин итә, әһәмиәтле һүҙҙәргә мәғәнәүи яҡтан баҫым яһарға мөмкинлек бирә.

3. Дәресте йомғаҡлау. 45 минут ваҡыт үтеп тә китте. Б.Бикбайҙың ижадын юғары кластарҙа өйрәнеүебеҙҙе дауам итербеҙ. Шәхестең ижады бик ҙур һәм бай, ә беҙ әле һеҙҙең менән шул күп ҡатлы йорттоң бәләкәй генә өлөшөндә сәйәхәт иттек. Уҡыусылар, телебеҙҙе һаҡлайыҡ, һәр яҡлап яҡлайыҡ.

4. Өйгә эш. “Рус теле” шиғырын ятларға.

# Ғайса Хөсәйеновтың
# “Һуңғы тарпан”хикәйәтен өйрәнеү
# (8-се класс, башҡорт теле)

**Маҡсат:** Әҫәрҙең идея – тематик йөкмәткеһен асыу; уҡыусыларҙың үҙ аллы эҙләнеү күнекмәләрен, бәйләнешле телмәрен үҫтереү, проза әҫәрен тикшереүгә өйрәтеүҙе дауам итеү, тыуған тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш, миһырбанлылыҡ тәрбиәләү.

**Эпиграф:** “Тарпан атҡа – бер арҡан” - әйтем.

**Йыһаҙландырыу:** уҡыусыларҙың үҙҙәренә оҡшаған эпизодҡа төшөргән һүрәттәре; Ғ.Хөсәйеновтың китаптары.

**Дәрес барышы.**

1.Уҡытыусы: Ғайса Хөсәйенов – яҙыусы һәм ғалим кеше. Ул филология фәндәре докторы. Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре. Академик. Ғайса Хөсәйенов - утыҙлап китап авторы. Уның матур әҙәбиәт буйынса “Сәйәхәт дәфтәре”, “Батырҙар ҡиссаһы”, “Тормош”, “Ҡанлы илле биш”, “Ил азаматтары” тигән китаптары донъя күрҙе. Был әҫәрҙәрендә Ғайса Хөсәйенов башҡорттоң данлы тарихы, боронғо көнкүреше, атаҡлы тарихи шәхестәре, батырҙары хаҡында яҙа. Уның боронғо кейек-ҡоштар, хайуандар тураһында, халыҡтың элекке кәсептәре хаҡында, яҙған хикәйәләре лә бар. Шуларҙың береһе - беҙ өйрәнә башлаған “Һуңғы тарпан” хикәйәте.
Өйҙә хикәйәтте уҡып, өйөр башына характеристика бирергә ҡушылғайны.
Автор тарпандар тураһында ниндәй мәғлүмәттәр табып уҡый? Тарпандарҙы ни өсөн кешеләр күпләп ҡырған? Тарпандарҙы һаҡлау өсөн кешеләр ниндәй саралар күргән? Ошо һорауҙарға беҙ һеҙҙең менән яуап биреп, элек-электән килгән экологик проблеманы күтәреп сығабыҙ һәм “Тәбиғиен һаҡлауға, тәбиғилеккә ни етә” – тигән юлға ҡарата фекер йөрөтөрбеҙ.

2. Һүҙлек эше.

Тарпан – Көнсығыш Европаның көнъяҡ далаларында йәшәгән, 19 быуаттың урталарында тотош ҡырып бөтөрөлгән, сысҡан һыртлы, көлһыу буҙ төҫлө ҡырағай ат.
Сапсан – етеҙ.
Һәүерек – үтә йәш мал.
Ҡонан -ике йәштән өс йәшкә тиклем айғыр.
Дүнән – дүрт йәшлек айғыр.
Һайҙаҡ - өйөрҙән айырып алынған ат.
Саңдау –йылҡы малының йәйге кәртәле туплам урыны.

3. Образдар системаһы:
а) кире образдар: тарпандарға хөжүм итеүсе халыҡ;
б) ыңғай образ: турайғыр тарпан;
в) хикәйәт итеүсе: Ғәлиулла бабай, автор.

4. Әңгәмә.
- “Һуңғы тарпан” хикәйәтендә ваҡиғалар ҡайһы быуатта бара? (19 – сы быуат һүрәтләнә).)
- Әҫәрҙә ниндәй проблема күтәрелә? ( Иң беренселәрҙән булып экологик проблема күтәрелеп сыға; кешеләрҙең ҡырағай аттарға ҡарата миһырбанһыҙлығы, ғәҙелһеҙлеге һүрәтләнә.)
- Хикәйәт нигеҙендә ниндәй конфликт ята? ( Тәбиғәтте һаҡлау, кешеләрҙең тамаҡ өсөн ҡомһоҙҙарса ҡыланыуы, тарпандарға ҡарата яуызлыҡ ҡылыуҙары; хайуандарға ҡарата оло хәҡиҡәт)

5.Эҙләнеү – тикшеренеү эше.
Әҫәрҙең төп конфликты – һуңғы өйөр тарпандарҙың, һуңғы тарпан тоҡомдарының баш бирмәй, йүгән, эйәр һалдырмай, кеше ҡулына эйәләшмәй һәләк булыуҙары. ( Тарпандарҙың үҙ иректәре өсөн көрәшкәндәре тураһында алдан әҙерләнгән бер нисә уҡыусы дәлилдәр килтереп һөйләй.)
Дәлилдәр:
1)Байтағы һилерәк яҡтарға таралған;
2) Бер нисә өйөр генә иҫән ҡала. Ул да өйөр башы айғырҙың үтә сослоғо, ажарлығы арҡаһында;

3) Ҡарт айғыр менән йәш айғырҙың яман алышы;
4) Йонсоу йылды тибен ерҙәр эҙләйҙәр;
5) Йәш айғыр өйөрөн бүреләрҙән ҡурсалаған;
6) Бер ҡырағай мал йәшәргә тырышып йылҡы көтөүен ҡырлай башлай;
7) Байҙың хеҙмәтселәре аҙбарға ябып ҡуя һәм ул ысҡынырға баҙнат итеп, алйып стенанан-стенаға һуғыла, сапсып, бәрелеп – оролоп башын – моронон емереп, һырт-ҡабырғаларын һыҙырып бөтә. Стенаға бәреп, һул күҙен сығара. Бер-нисә көн бесән-һыуҙан баш тарта. Был ҡыламыштары ирекһеҙ иткән әҙәмдәргә ҡаршылыҡ күрһәтеүе булғандыр бәлки.
8) Яҙ көнө тарпан ҡолонлай. Болонға сығарғас ул ғәйеп була. Күпмелер йөрөгәс килеп ҡолонон тотҡонлоҡтан ҡотҡарып, икәүләшеп юғалалар.
9) Аяғы һынғас кешеләр был тарпанды ҡыҙғанып, уға ағастан тояҡ яһайҙар. Баш, ирек бирмәҫ хайуан ағас таяғын тибеп һындырып, ашау-эсеүҙән баш тартып, аяҡ өҫтө йән бирә.

6.Әҫәр буйынса һорауҙар:
- Авторҙы ниндәй күренеш Ғәлиулла бабайҙың хикәйәтен иҫкә төшөрә?
(Һабан атының өнһөҙ илағаны.)
-Тарпандар нисек йәшәгән? (Текстан табып уҡырға.)
- Турайғыр һәм уның өйөрө нисек һәләк була? ( Турайғырҙы һәм уның өйөрөн кешеләр уҡтар, һөңгөләр менән ҡаҙап үлтерәләр. Һуңғы тарпан өйөрө шулай һәләк була.)
- Тарпан бейә ирекһеҙлекте нисек кисерә? ( Ауыр кисерә, Һуғылып-бәрелеп тәндәре ҡанап бөтә, һуң күҙе сыға, ашауҙан, эсеүҙән баш тарта.)
- Тарпандарҙы кешеләр ни өсөн күпләп ҡырған? ( Һуғым өсөн.)
- Тарпандарҙы һаҡлау өсөн кешеләр ниндәй саралар күргән? (Бүтән ат тоҡомдары менән ҡушып ҡараған.)
- Был саралар ярҙам иткәнме? (Юҡ, сөнки тәбиғәт үҙенекен иткән, яңа яҫалма нәҫел тарпанлығын юғалтҡан.)

7. Хикәйәт буйынса фекер алышыу:

Уҡытыусы: Ә хәҙер, уҡыусылар һәр берегеҙ дәфтәрҙәрегеҙҙе алып, хикәйәткә ҡарата үҙегеҙҙең уй-фекерегеҙҙе яҙып (4-5 һөйләм) синыфташтарығыҙға уҡып ишеттерегеҙ. (Һәр бер уҡыусы үҙенең фекере менән таныштыра һәм һүрәт төшөргән уҡыусыларға һүҙ бирелә.)

8. Йомғаҡлау.

Был тетрәткес хикәйәтте уҡығас күңелгә бик күп уйҙар килә, һорауҙар тыуа. Ни өсөн әҙәм балаһы шул матур, ғорур заттарға ҡул күтәрҙе икән? Хәҙерге ваҡытта ла тарпандар көн итһә беҙҙең тәбиғәт нисегерәк булыр ине икән? Әлбиттә был һорауҙар яуапһыҙ ҡала. Был әҫәр хикәйәт кенә түгел, хәҡиҡәт. Был хәл 1879-1881 йылдарҙа – Яйыҡ буйы далаларында булған. Һуңғы өйөр тарпандары, һуңғы тарпан кешегә баш бирмәй аяуһыҙ ҡырылып, юҡҡа сығарыла. Уларҙы тәмле ите өсөн йөҙәрләп-меңәрләп аулағандар. Ҡайһы бер аңлы кешеләр, уларҙы һаҡлап ҡалыу ниәте менән, бүтән ат тоҡомдары менән ҡушып ҡарағандар. Ләкин тәбиғәт йыш ҡына үҙенекен иткән. Яңы яҫалма нәҫел бер нисә быуындан йорт аты нәҫеленә кире ҡайтҡан, тарпанлығын юғалтҡан. Ошоларҙан сығып һығымта яһаһы килә: тәбиғәтте, тәбиғилекте бөтә көс менән һаҡларға һәм ҡурсалап яҡларға кәрәк, сөнки һәр бер зат үҙ булмышында матур, күркәм һәм тәбиғәттә үҙ урынын алып тора. Һеҙ, уҡыусылар, киләсәк быуын балалары, һеҙҙең өҫкә ҙур йөк йөкмәтелә. Тәбиғәтте һаҡлағыҙ, ҡулдарығыҙҙан килгәнсә байытығыҙ. Дәресте автор һүҙҙәре менән тамамлаһым килә: “Тәбиғиен һаҡлауға, тәбиғилеккә ни етә”. Һеҙгә лә ошо юлдар ғүмерлек фәһем булып ҡалһын.

9.Өйгә эш.

Р.Бикбаевтың шиғыр китаптарын алып килергә.

# Һәҙиә Дәүләтшина – рух баһадиры.
## (10-сы класта башҡорт  теле дәресендә Һәҙиә Дәүләтшинаның тормош һәм ижад юлы менән танышыу)

**Тема:** Һәҙиә Дәүләтшина – рух баһадиры

**Маҡсат:** Яҙыусының ҡатмарлы тормош юлы менән таныштырыу, ҡаһарманлығының ниҙән ғибәрәт икәнен асыҡлау. Уҡыусыларҙың телмәрен үҫтереү, яҙыусы әҫәрҙәрен уҡырға теләк һәм ҡыҙыҡһыныу уятыу. Шәхесенә һоҡланыу тойғоһо тәрбиәләү.
**Йыһазландырыу:** Яҙыусының һүрәте; китаптар күргәҙмәһе; мультимедиа проекторы; мультимедиа проектор аша күрһәтеү өсөн слайдтар.

Дәрес барышы.

I. Шиғриәт минуттары.
Тыныс ҡына ҡурай моңо ағыла.

Уҡытыусы: “Бейек тауҙар араһынан сығып, далаларҙа борғоланып-борғоланып шыуған оло аҡ йылан һымаҡ, наҙланып аҡҡан Ырғыҙ йылғаһы, Байсура тауҙың итәгенә тотҡан киң таҫма кеүек әйләнә лә, тағы әллә ҡайҙа ағып китә. Яҙ башында ҡалын боҙҙар иреп ташҡандан бирле уның тыныслығын бер кем дә боҙғаны юҡ. Балыҡтар ҡояш нурҙарында көмөш тамсылар сәсрәтеп сиртәләр ҙә, түңәрәк һырлы йондоҙҙар яһап, төпкә сумалар, үҙҙәрен ҡыуалаған эре балыҡтарҙан ҡасып юҡ булалар”.

Ауылыңда  булдым, Һәҙиә апай,
Ҡырҙарыңды  һинең  ҡыҙырҙым.
Хас та  беҙҙең  ауыл һинең  Хәсән,
Хас  Урғаҙа  инде  Ырғыҙың.

Баланлы ла булдым. Романың бит
Шул йәйләүҙәр менән  башлана.

Тәбиғәтең һаман шундай гүзәл,
Шишмәләрең шундай татлылар.

Яҡташтарың бик ҡунаҡсыл икән,
Һинең кеүек яҡын, мөләйем.
Һәр аҙымың һинең һағыналар,
Тик һин генә быны белмәйһең.

Халыҡ һине һөйә, үҙ ҡыҙым тип,
Халҡыңа һин хеҙмәт иткәнгә.
Бик бәхетлеһең, Һәҙиә апай,
Йөрәк һүҙең уға еткәнгә.

Күркәм Ырғыҙ йылғаһының башында Хәсән ауылында ярлы крәҫтиән Лотфулла Ильясов ғаиләһендә ҡыҙ бала донъяға ауаҙ һала. Ата-әсәһе уға Һәҙиә тип исем ҡуша. Һәҙиә ғәрәп телендә “бүләк” тигән һүҙ. Улар үҙҙәренең был сибәр һәм ғәйрәтле ҡыҙҙарының халыҡҡа бөйөк бүләк буласағын белделәрме икән?… Кескәй Һәҙиәне Салауат Юлаев исемендәге мәртәбәле премияға лайыҡ булған бөйөк яҙыусы Һәҙиә Дәүләтшина итеп үрләткән ҡаһарманлыҡҡа юл ҡайҙан башлана икән?

Һәҙиә Дәүләтшина… Был исемде ишетеү менән уйсан, алыҫҡа төбәлгән һағышлы ҡарашлы, зифа буйлы һылыу ҡатын күҙ алдына баҫа. Уның күҙҙәрендә әйтеп бирә алмаҫлыҡ зар бар: әйтерһең, ул үҙ ғүмерен, үҙ дәүеренең йәшәү мәғәнәһен юғалтҡан да, шуны аңлатып биреүҙе үтенә беҙҙән. Әйҙәгеҙ, беҙ уның үтенес һорауына яуапты бергәләп эҙләйек. Дәресебеҙҙең маҡсаты ла – тап ошо. Ҡаһарман шәхестең, бөйөк яҙыусының тормош юлына, рухи сығанаҡтарына байҡау яһап, Ырғыҙ буйында тыуып үҫкән ябай ауыл ҡыҙын ил киңлектәренә алып сыҡҡан бөйөк көстөң асылына төшөнәйек.

Хәҙер класташығыҙ уҡыясаҡ шиғыр “Өмөт” тип атала. Шиғырҙы иғтибар менән тыңлағыҙ, нимә тураһында был шиғыр һәм был юлдарҙың авторы кем тип уйлайһығыҙ?

Күпме генә болот ҡабармаһын,
Ниндәй ел-дауылдар ҡупмаһын,
Ҡояш сыҡмай ҡалмай көн һайын,
Тик һынмаһын өмөт тотҡаһы.

Һ.Дәүләтшина

II. Яңы темаға күсеү

Кем быңдай йөкмәткеле шиғыр яҙған тип уйлайһығыҙ? (Йылдар буйы дуҫтарынан айырылып торған кеше. Тик ул өмөтөн юймаған).

- Был 4 юллыҡтың авторының рухы һынмауын ниндәй юлдар күрһәтә?

- Был юлдарҙың авторы кем тип уйлайһығыҙ?

Эйе, Һәҙиә Дәүләтшина. Бөгөн беҙ бөйөк шәхестәребеҙҙең береһе менән танышырбыҙ. Дәфтәрҙәрҙе асып числоны, теманы яҙайыҡ.

Егерменән ашыу шиғыры уның күптән түгел генә табылды. "Өмөт" шиғыры ла шулар араһынан. Тәбиғәт күренештәре аша Һ.Дәүләтшина үҙенең аяныс хәленең ваҡытлы икәнен һүрәтләй, төн артынан көн тыуыуында, балҡып ҡояш сығыуында үҙенең киләсәген күрә. Тиҙҙән яҙыусының өмөттәре аҡлана.

Кешене өмөт йәшәтә, тибеҙ. Ысынлап та, өмөт һүнһә – кеше лә бирешә, йәшәүенең мәғәнәһе ҡалмай. Ә өмөтө өҙөлмәгән, алдағы көнгә ышаныс менән йәшәгәндәрҙе, бирешмәүселәрҙе кемдәр тиҙәр? (баһадир, ҡаһарман, рухлы). Уҡыусылар, был һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен аңлатып бирә алаһығыҙмы? Алдығыҙҙа һүҙлектәр ята, улар менән ҡуллана алаһығыҙ. (Өс төркөмгә өс һүҙ).

- Был юлдарҙың авторын да, уҡыусылар, рух баһадиры, ҡаһарман тип атап буламы?

(Яҙыусы Һ.Дәүләтшина – сиктән тыш ғазаплы тормош юлы үткән кеше. Уға кисерергә тура килгән ауырлыҡтар баҫымы

аҫтында арыҫландай ирҙәр бөгөлөп төштөләр, ҡанаттарын һындырҙылар, баштарын юғалттылар. Тик Һәҙиә Дәүләтшина бөгөлмәне лә, һынманы ла. Шуға ла ул һүҙҙең ысын һәм тура мәғәнәһендә – рух баһадиры).

1942 йылда Өфөгә ҡайта. Был йәһәттән яҙыусының шиғырҙар менән бергә табылған ошондай һүҙҙәре лә бар: “1943 йыл, Өфө урамы. Мин рәхәтләнеп ҡарап йөрөйөм. Өфөнө һағынғанмын, бик һағынғанмын. Бер кеше мине ҡапыл ҡосаҡланы. “Һәҙиә, һинме?” – тине. Тауыш тулҡыны бөттө, бүтән һүҙ әйтә алманы, йыш тын алды, күҙенән ике генә бөртөк йәш тәгәрәп төштө. Ул бер аҙ тынысланды ла: “Бриллиантты бысраҡҡа ташлау менән, ул юғаламы ни, боҙоламы ни ул!..” – тине. Был – шағирә Зәйнәп Зөбәйерова ине. Мин тағы бер тапҡыр, халыҡ онотмай, тип уйланым, тағы ла көс алдым мин”.

Уҡыусылар менән бергәләп дәрестең маҡсатын асыҡлау.

Һәҙиә Дәүләтшина… Был кешене белмәгән, уның ҡаһарман ғүмеренә һоҡланмаған, уға ҡайнар ғашиҡ булмаған кеше юҡтыр беҙҙең республикала. Һеҙ ҙә был исемде тәүге тапҡыр ишетмәйһегеҙ, уның ҡайһы бер әҫәрҙәре менән танышһығыҙ – “Һылыуҡай-пионерка”, “Айбикә”( 8-се класс материалы). Бөгөнгө дәрестә Һәҙиә Дәүләтшинаның тормош һәм ижад юлынан нимәләр белергә теләр инегеҙ?

(Кем һуң ул Һәҙиә? Ниңә Һ. Дәүләтшинаның тормош һәм ижад юлын ҡаһарманлыҡҡа тиңләйҙәр?Нисә йыл йәшәгән?Ниндәй кеше булған?Тормош юлы уның ниндәй булған? Яҙмыш уға ниндәй һынауҙар әҙерләй? 37-се йыл уның яҙмышында ниндәй урын тота? Уның ниндәй әҫәрҙәре бар?Уның тураһында яҙыусылар, иптәштәре нимәләр тигәндәр?)

4) Һорауҙар күп, һәр береһенә яуап, дәлил табырға тырышырбыҙ. Шуның өсөн эште алып барыу юлдарын асыҡлайыҡ.

- Нисегерәк эшләһәк, ошо һорауҙарға яуап таба алырбыҙ? Тәкдим итегеҙ.

а) слайдтар ярҙамында биографик белешмә.

б) иҫтәлектәрҙән өҙөк уҡыу.

в) иҫтәлектәрҙән сығып портретын төҙөйбөҙ.

г) ғаилә альбомын күҙ алдына килтереү.
д) группаларҙа эшләү.
5) Ошо эштәрҙең ҡайһыһынан башлайыҡ? Нисек кенә булмаһын. Беҙгә эҙләнергә,тикшерергә, иҫбатларға тура киләсәк. 37-се йыл Һ.Дәүләтшина тормошонда –нахаҡҡа ғәйепләнеү йылы. Нисә йыл “халыҡ дошманы” исемен йөрөтә? Ҡасан аҡлана? Ниндәй ҡатмарлы юлдар үтергә тура килә?
Тикшерәйек.

Тимәк, дәрестең маҡсатынан сығып, беҙ дәрестең формаһын да биләдәләй алабыҙ. Дәрес-тикшереү, эҙләнеү итеп ойошторайыҡ.

III. Яңы тема.
1) Уҡыусылар, тикшереү эшен нисек ойошторалар, кемдәр ҡатнаша унда, нимәләргә иғтибар итәләр, һеҙ кинофильмдарҙан бик яҡшы беләһегеҙ.
Бөгөн беҙ – тикшереүселәр. Әйҙәгеҙ эште башлайыҡ.
Беҙҙең бөгөнгө оператив дәресебеҙгә хәбәр килде:
“Яҙыусы Һәҙиә Дәүләтшинаның лагерҙа яҙылған көндәлектәре, шиғырҙары, әҙер повесть йәки романын туплаған архив юғалған”.
(Һ. Дәүләтшинаның әсәһе Гөлйәүһәр апай йәшәгән квартира хужаһы Рәхилә Хасанова белдереүенән, “Советская Башкирия”, № 218, 18 сентябрь, 1988, “История одной несправедливости” Г.Шафиков).
Тикшереп асыҡларға:
1. Кем алған был бер тоҡ архив материалын? Ғәйепле кешене табырға. Дөрөҫөрәге: Фажиғәле яҙмышлы, атаҡлы яҙыусы Һ.Дәүләтшинаның әҙәби мираҫы ҡайҙа?...

2. Был архивта нимәләр булған һәм уларҙың культура, тарих өсөн әһәмиәтен асыҡларға, ә асыҡлау буйынса башланған эште - дауам итергә.
Әлбиттә, беҙҙең ултырышта судья ла, адвокат та, прокурор ҙа юҡ, шуға күрә

эҙләнеүҙе әҙәбиәтте һөйөүселәр күҙлегенән алып барайыҡ. Тиҫтәләгән йылдар үткән, дөрөҫлөктөң тантана итеүенә ышаныуы ла ҡыйын. Тик мәшһүр яҙыусының ижади гәүһәрҙәре халыҡҡа ҡайтарып бирелергә тейеш.

2) Әйҙәгеҙ, эҙләнеүҙе башлайыҡ.

Эш тәртибе:

1. Һ.Дәүләтшинаның биографияһының төп даталарын хәтергә төшөрөп китәйек. (Слайд : биографик белешмә, уҡыусы таныштыра)

1905 йылдың 5 марты – Һамар губернаһы Пугачев өйәҙе Хәсән ауылында тыуа.

1920-21 йылдар – Куйбышев өлкәһенең Диңгеҙбай ауылында уҡытыусы.

1921 йыл – Һамар ҡалаһында педтехникумда уҡый.

1922 йыл – Ғ.Дәүләтшинға кейәүгә сыға һәм Мәскәүгә китә.

1923 йыл – Өфөгә килә.

1924 йыл – рабфакта уҡыуын дауам итә.

1926 йыл – "Һылыуҡай – пионерка" хикәйәһе.

1927-32 йыл – Өфөлә Ш.Хоҙайбирҙин исемендәге Балалар йортонда эшләй.

1931 йыл – "Айбикә" повесы баҫыла.

1932 йыл – Мәскәүҙә китап нәшриәттәре өсөн редакторҙар әҙерләү институты.

1933 йыл – Баймаҡ район гәзитендә әҙәби сотрудник.

1935-1937 йыл дар – БДПИ-ның филология факультеты.

1934 йыл – СССР яҙыусыларының I съезында делегат.

1935 йыл – СССР Яҙыусылар союзы ағзаһы.

1942-52 йыл – "Ырғыҙ" романын яҙа.

1937 йылдың 20 ноябрендә Ватанға хыянат итеүсенең ғаилә ағзаһы булыуында ғәйепләп, ҡулға алалар һәм НКВД Айырым кәңәшмәһе тарафынан 5 йылға иркенән мәхрүм итәләр.

1937-1942 йылдарҙа Мордовия Темников лагерҙарында ултыра.

1954 дың 5 декабрендә - Бөрө ҡалаһында үпкә ауырыуынан вафат була.

Һәҙиә Лотфулла ҡыҙы Дәүләтшина Һамар өлкәһе Хәсән ауылында тыуа. Ул зирәк аҡыллы һәм теремек бала булып үҫә.

Кескәй сағынан өләсәһенең тылсымлы экиәттәрен тыңларға ярата. Ун биш йәшендә тиф ауырыуынан атаһы донъя ҡуя, әсәһе һаңғырауланып ҡала. Һәҙиә үҙен ғаилә башлығы булырға тейешлеген аңлай һәм Диңгеҙбай ауылында уҡыта башлай. Ун ете йәшендә Ғөбәй Дәүләтшинға кейәүгә сыға. Ғаилә альбомдарынан күренеүенсә улар егерменсе йылдан уҡ таныш булалар. Егерме өсөнсө йылда улдары Булат тыуа. Әммә аяныслы яҙмыш ун айлыҡ сабыйҙың ғүмерен өҙә. Бүтән уларҙың балалары булмай. Әсәһен, Гөлйәүһәр апайҙы Дәүләтшиндар гел үҙҙәре менән йөрөтәләр. Төрмәлә ултырған ваҡытында әсәһе квартираларының кухняһында йәшәп, ҡыҙын, үҙе әйтеүенсә “күҙ нурын”, көтөп ала. Ә Һәҙиә Мордовия төрмәһенән бөтә һаулығын юғалтып, күкрәгенән ҡан төкөрөп ҡайта. Унда хеҙмәтен 300% процентҡа арттырып үтәп, өҫтәмә паек алып, уны бала-сағаға өләшә. Лагерҙа улар ирҙәр күлдәге яғаһын, ашъяулыҡ һәм башҡа әйберҙәр сиккән. “Книга отличника” ла алып ҡайта ул Сталин лагерынан. Ниндәй миҙалдар тағып ҡайтһаң да төрмә төрмә булып ҡала инде ул.

Биш йыл үткәс, Һ. Дәүләтшина Өфөгә ҡайта. Әммә әсәһе эргәһендә бер генә тәүлек тора ала, Стәрлетамаҡҡа китергә мәжбүр була. Унда сауҙа бүлегенә надомница булып урынлаша. Ике йыл үтә. Үпкә сире көсәйгәндән-көсәйә. Өфөлә ваҡытлыса йәшәргә рөхсәт бирелә. Ауыл хужалығы ғилми-тәжрибә станцияһында төнгө ҡарауылсы булып эшләй башлай. Төндәр буйы романын яҙа.

1945 йылда еҙнә тейешле кешеһе булған Зәйнулла Сафинға кейәүгә сыға, бергәләп уның етенселә уҡыған ҡыҙын тәрбиәләп оло тормош юлына сығаралар. Улар Силәбе өлкәһендәге Сулея станцияһында йәшәйҙәр, һуңынан, 1951йылда Бөрө ҡалаһына күсенеп киләләр.

Күренеүенсә Һәҙиә Дәүләтшинаның ғүмере еңел булмаған, әммә уның ихтыяры һынмаған, сәләмәтлеге ҡаҡшаһа ла, рухы ҡоростай ныҡ булған.

Дәресте заман һулышына бәйләнгән бәләкәй генә бер шиғыр менән дауам итәйек:

Аңыбыҙҙа,

Атҡан таңыбыҙҙа
Минут һайын күпме яңырыу.
Ерем йөрәгенә яңы тибеш
Илтә бөгөн заман тамыры.
Тормош хәҙер, гүйә, ҡара таҡта,
Балҡып сыға унда аҡ һүҙҙәр:
“Билдәлелек”, “Халыҡ ышанысы”,
“Демократия” тигән нигеҙҙәр.

Ә. Таһирова

Эйе, илдә барған үҙгәртеп ҡороу тормошобоҙҙоң барлыҡ өлкәләренә лә яйлап булһа ла үтеп инә. Элек әйтергә лә ҡыймай торған һүҙҙәр, исемдәр яңынан халыҡҡа ҡайта, тарихтағы аҡ таптар тураһында күберәк беләбеҙ.

Һәҙиә Дәүләтшина тураһындағы биографик белешмәлә 1937-1942 йылдар араһында 5 йыл арауығы буш ҡалған. Яҙыусының ижад юлы ил яҙмышы менән бәйләнгән. Илебеҙ тарихына был йылдар ниндәй ваҡиғалар менән ингән? (“Репрессия”) Ҡайҙан ҡайта ул Башҡортостанға? Күҙҙәрендә ҡатып ҡалған зар, әрнеү ҙә ошо йылдарға бәйләнмәнеме икән?

Уҡыусы яуабы: 1937 йылдың 20 ноябрендә яҙыусыны, йәнәһе, Ватанға хыянат итеүсенең ғаилә ағзаһының ҡатыны тип ғәйепләп, ҡулға алалар һәм 5 йылға төрмәгә ябалар. Сөнки бынан бер ай элек уның ире Ғөбәй Дәүләтшинды, нахаҡҡа ғәйепләп, ҡулға алалар һәм 1938 йылда үлем язаһына хөкөм итәләр.

Беҙҙең башҡорт әҙәбиәтендә, туғандаш татар, рус әҙәбиәттәрендә лә былай билдәле шәхестәр бик күп. Миҫал өсөн бер нисәһен генә атап китәйек: Дауыт Юлтый, Имай Насыри; татар яҙыусыларынан Хәсән Туфан, Фатих Кәрим; рус яҙыусыларынан Александр Солженицын, Варлам Шаламов. Политик террорға тарттырылған кешеләр тиҫтәләрсә, һәр береһенең үҙенең яҙмышы.

Уҡыусылар, әйҙәгеҙ бер мәлгә генә яҙыусы яҙмышын, әсә һәм ҡатын бәхетен емергән ваҡиғаларҙы күҙ алдына килтереп ҡарайыҡ.

Аянына яҙмыш… тере саҡта ла йүнләп көн күрмәгән, үлгәс тә әҫәрҙәре урланып рәнйетелгән яҙыусы. Бәғерҙәрҙе тетрәндерерлек, намыҫты һиҫкәндерерлек бит был.
2. 1954 йылда һуңғы тапҡыр больницаға китер алдынан ул әсәһенә әйтеп китә: "Әсәй, бөтә материалдарҙың өҫтөнә бер төргәк ҡуям. "Ырғыҙ" баҫылып сыҡҡас бирерһең. Нимәнең нимәгә кәрәклеген һуңынан төшөнөрҙәр". Әҙибәнең романы менән икенсе дәрестә яҡындан танышырбыҙ. Тик шуны ғына әйтеп китергә кәрәк, был роман өҫтөндә ул егерме йыл эшләй, ғәрәп алфавитында яҙа. Идея – эстәлеген автор бына нисек билдәләй: "Минең романдың темаһы шул – аҙ һанлы башҡорттарҙың, уның байҙарының һәм батрактарының нисек йәшәгәнлектәрен һәм үҙ-ара көрәшкәнлектәрен күрһәтеү". Леонид Соболев был әҫәр тураһында бына нимә тип яҙа: "Не зная романа Хадии Давлетшиной "Иргиз", нельзя понять действительности башкирского народа".
Бер айҙан һуң Һәҙиә үлә.
Хәҙер яҙыусы ла , уның әсәһе лә юҡ.
- Кемдәр беҙгә ярҙам итер һуң?
( Ғәзим Шафиҡов, Марат Минһажетдинов, Зәйнәб Биишева, Рәйсә Сафина-Мөхәмәтова, Әхмәт Сөләймәнов, китаптар: "Һәҙиә Дәүләтшина тураһында иҫтәлектәр" (төҙөүсеһе М.Хәмиҙуллина). Гәзит – журнал материалдары).
- Кемдәрҙең ғаилә альбомында Һ. Дәүләтшинаның фотоһы, иҫтәлеге барҙыр? (Уҡыусылар иҫтәлек яҙған кешеләрҙең исемдәрен әйтәләр: Зәйнәб Биишева, Садиҡ Байтурин, Фатима Юлтыева, Сәхәү Дәүләтшин, Ғәлиә Мырҙагилдина-Баязитова, Шакирә Ишкинина, Рәйсә Сафина-Мөхәмәтова, Фатима Мостафина, Ғүмәр Мөхәмәтшин)
- Ниндәйерәк кеше булған ул? (тышҡы һәм эске сифәрлеге тураһында уҡыусылар иҫтәлектәр буйынса яҙып алалар һәм әйтеп бирәләр).
Татар совет әҙәбиәте белгесе Хатип Ғосман былай тип яҙған: " Һәҙиә Дәүләтшинаның тормошо – трагизм һәм көрәш, тәрән ҡайғы һәм бер үк ваҡытта бөтмәҫ оптимизм менән тулы үҙе бер героик йыр ул" (Слайд)

2. Хәкиҡәт асыҡланырмы? (Енәйәттең версияларын эшләү). Версия – ваҡиға йәки факт тураһында һөйләгәндәрҙең береһе – нимә ул, һүҙлектән ҡарау.

3. Тикшереү (гәзит-журналдарҙа баҫылған мәҡәләләр буйынса факттар килтереү)

- (“Билдәле булыуынса, яҙыусының “Ырғыҙ” романы үҙе иҫән саҡта донъя күрмәй ҡала. Зәйнулла Сафин әйтеүенсә, улар Һәҙиә менән Башҡортостан яҙыусылар союзына ошо китапты баҫтырыуҙарын юллап ике тапҡыр бара. Һәҙиә үлгәс, Зәйнулла Башҡортостан республикаһының Яҙыусылар союзына хәбәр ебәрә. Әммә унан килеүсе лә, яуап биреүсе лә булмай. Бер ай үткәс кенә, яҙыусыны иҫкә алыусы табыла. Тәүгеләрҙән булып Ғәйнан Әмири килеп, Яҙыусылар союзы исеменән тип Һ. Дәүләтшинаның бөтә архив материалдарын алып китә. Күп тә үтмәй, Зәйнәб Биишева килә, әммә бер нәмәһеҙ ҡайтып китә.”Был статьялағы дөрөҫлөктәрҙе асыҡлар өсөн Бөрө ҡалаһынан Әхтәм Мофазалов яҙа “Башҡортостан”гәзите, 2007 йыл, 3 август№149 “Хәтирәләр асыҡлыҡ индерә”)

- “Ағиҙел” журналы, №6, 2011йыл,Ноғман Мусиндың “Хәтер шаңдауы” эссеһы,12-14 биттәр.

4. Һығымта сығарыу, эште йомғаҡлау.

1) Ғ.Әмири, ысынлап та, архивты алып, тарих тел һәм әҙәбиәт институтына тапшырған (Назар Нәжмиҙең белдереүенән, 1963 йылғы ултырышы, яҙыусылар ултырышындағы протоколынан билдәле).

2) Һ.Дәүләтшинаның архивын, әҙәби мираҫын таба алмауға ҙур үкенес белдерергә.

3) Һ.Дәүләтшинаның “Айбикә” повесы һәм төрлө йылдарҙа яҙылған хикәйә, очерктары тупланған “Айбикә” китабы, “Ырғыҙ” романы ғына баҫылған.

4) Эҙләнеүҙе дауам итергә.

5) Бөгөнгө көндә Һ.Дәүләтшина исемен мәңгеләштереү буйынса республикабыҙҙа ниндәй эштәр башҡарылған һәм башҡарыла?

- Уға 1967 йылда С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы бирелә;

- Бөрө дәүләт социаль-педагогия академияһында ойошторолған Һәҙиә Дәүләтшинаның кабинет-музейы асыла;
- Бөрө ҡалаһында бюст ҡуйыла;
- Ғәзим Шафиҡовтың “Һәҙиә” пьесаһында сәхнәгә ҡайтты;
- Рәүеф Мортазиндың “Дауыл” операһы;
- Рәссам Ә.Ф. Лотфуллиндың “Яҙыусы Һәҙиә Дәүләтшина портреты”;
- Рәссам Р.Абдуллиндың Һәҙиә Дәүләтшинаның портреты;
- Рәссам Ә. Галиндың Һәҙиә Дәүләтшинаның портреты;
- Баш ҡалабыҙ Өфөлә , Бөрөлә, Үрге Йәркәйҙә яҙыусының исемен йөрөткән урамдар бар;
- Балалар һәм үҫмерҙәр өсөн әҙәбиәтте һәм сәнғәтте артабан үҫтереүҙе дәртләндереү;
- Үҫеп килгән быуынға рухи-әхаҡи, патриотик тәрбиә биреүҙе көсәйтеү;
- Шулай уҡ күренекле яҙыусы иҫтәлеген мәңгеләштереү маҡсатында Һ.Дәүләтшина исемендәге Дәүләт премияһы булдырылды. 2006 йылда Гөлфиә Юнысова, 2009 йылда Факил Мырҙаҡаевтар лайыҡ булдылар.

IV. Дәресте йомғаҡлау

Һ.Дәүләтшинаның ижады, ғүмере – бөйөк ҡаһарманлыҡ ул. Был аяныслы яҙмыштың ҡайһылыр биттәрен генә ҡарап сығыу ҙа күңелде, йөрәкте, зиһенде ҡуҙғатты, төрлө уйҙар диңгеҙенә алып китте. Ғәҙеллектең һәм дөрөҫлөктөң һуң булһа ла еңеп сығыуын аңлау бер аҙ йөрәкте баҫа, йыуандыра. Тик тынысланырға беҙгә иртәрәк әле.

Халыҡтың ғәйепһеҙгә ғәйепләнеп, йәшәгән саҡтарында фажиғәле яҙмышҡа дусар ителгән, үлгәс исемдәрен дә әйтеү тыйылған батыр йөрәкле ул һәм ҡыҙҙарының тормош юлдарын, эшмәкәрлеген яҡшы итеп өйрәнеп, кире халыҡҡа ҡайтарыу эше менән шөғөлләнеүселәрҙең ҡыйыу аҙымына һоҡланаһы ғына ҡала. Был да бит үҙе батырлыҡ! Илдә барған үҙгәреш, заман бындай ҡыйыулыҡты быумаһа, туҡтатмаһа ине. Өмөтөбөҙ ҙур

беҙҙең. Ә дәресте халыҡ шағире Әнғәм Атнабаевтың Һәҙиә Дәүләтшина иҫтәлегенә яҙылған “Һары сәскәләр” шиғыры менән тамамлағы килә.

V. Өйгә эш.

Һ. Дәүләтшинаға арнап яҙылған хаттар, шиғырҙар, әҫәрҙәрҙе барларға.

VI. Баһалау.

## Рәшит Ниғмәтизең “Һаҡмар ҡыҙы" поэмаһында хеҙмәт кешеһе образы (10 класс)

**Дәрестең маҡсаты:** уҡыусыларҙың Р. Ниғмәтизең тормош юлы һәм ижады тураһында алған белемдәрен нығытыу; әҫәрҙең йөкмәткеһен анализлау, хеҙмәткә ҡарата һөйөү уятыу, маһайыу сире тураһында әңгәмәләшеү; бер - береһенә, коллективҡа ҡарата ихтирам тәрбиәләү.

**Йыһазландырыу:** Р.Ниғмәтизең портреты, китаптар күргәҙмәһе, Ким Әхмәтйәновтың “Әҙәбиәт терияһы” китабы, башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге, проектор.

Бул һин тик халҡыңа тоғро,  
Ит хеҙмәт арыу белмәй.  
Маҡтау, хурлау ғүмерһеҙ ул,  
Тик хеҙмәт йәшәй, үлмәй.  
З.Биишева

I.Ойоштороу моменты.
II.Уҡытыусының инеш һүҙе.

Рәшит Ниғмәти йәки Рәшит Ниғмәтулла улы Ниғмәтуллин башҡорт әҙәбиәтенең иң күренекле вәкилдәренең береһе. Совет халҡының героик эштәрен һәм яҡты образдарын сағылдырыусы иң яҡшы шиғырҙары, “Йәмле Ағиҙел буйҙары”, “Һинең кәләшеңдең хаттары”, “Һаҡмар ҡыҙы”, “Осҡондан ялҡын…” кеүек поэмалары менән Рәшит Ниғмәти башҡорт әҙәбиәтен идея-тематик яҡтан байыҡтырыуға күп көс һалды, уға күп өр-яңы жанрҙар һәм поэтик формалар алып килде. Шуға күрә Рәшит Ниғмәтигә хаҡлы рәүештә Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән почетлы исем бирелде.

III.Өй эшен тикшереү.

Һеҙ Р.Ниғмәтизең биографияһын, әҫәрҙәрен өйрәнә башлағанһығыҙ. Һәм өй эше итеп шағирҙең тормош юлы менән тәрәнерәк танышырға, “Һаҡмар ҡыҙы” поэмаһын тулыһынса

уҡып сығырға тәғәйенләнгәйне. Эште башлар алдынан тест һорауҙарына яуап биреп ҡарайыҡ.

1. Р.Ниғмәти ҡайһы йылдарҙа йәшәгән?

1)1905-1954 2) 1909-1959 3)1911-1939 4)1903-1938 5)1893-1938

2. Р.Ниғмәти ҡайһы ауылда тыуған?

1)Әсән 2)Үрге Илъяс 3)Иҫке күл 4)Диңгеҙбай 5)Хәсән

3. Р.Ниғмәтигә ҡасан халыҡ яҙыусыһы исеме бирелә?

1)1923 2)1959 3)1963 4) 1969 5)1980

4.Р.Ниғмәтиҙең ҡайһы поэмаһында маһайыу ауырыуы тураһында һүҙ бара?

1)"Дауылдар тыуҙырған ғүмер"

2)"Баҫыу хөкөмө"

3)"Һаҡмар ҡыҙы"

4)"Үлтер улым, фашисты!"

5)"Осҡондан ялҡын"

5.Р.Ниғмәти ҡайҙа ерләнгән?

1)Диңгеҙбайҙа 2)Һамарҙа 3)Туймазыла 4)Өфөлә

Шағирҙың ижады ла, тормошо ла бай һәм ҡатмарлы. Р.Ниғмәтиҙең ижадын осорҙарға бүлеп ҡарау уңайлыраҡ:

1) Ижадының тәүге осоро – был осорҙа Р.Ниғмәти йәшлегенең дәртлелеге менән айырылып тора. “Кереш” исемле тәүге китабында ул эшселәр тормошон күрһәтергә ынтыла. Азатлыҡ, хеҙмәт темаларын оҫта аса. Уның геройҙары алдағы тормош өсөн көрәшергә әҙер.

2)Артабан, икенсе ижад осоронда Р.Ниғмәтиҙең маҡсаты ҡырҡа үҙгәрә. Ни өсөн? Сөнки илдә Бөйөк Ватан һуғышы башлана. Һәм бөтә халыҡ берҙәм илде яҡларға, дошманды ҡырырға өндәү. Һәм шиғырҙарҙың стиле – “өндәү”гә әйләнә. (“Үлтер, улым, фашисты!”)

3) Ә инде өсөнсө осоро Бөйөк Ватан һуғышынан һуң ижады тип атала. Һуғыштан һуңғы йылдарҙа беҙҙең илдә яңынан тормошто яйлау, яңы төҙөлөштәр башлау тип маҡсаттар ҡуйыла. Һәм был яңы дәүерҙе күтәреү өсөн шағирҙарҙың ярҙамы тағы ла арта.

Халыҡты йыуатырға, яңы тыныс киләсәккә ынтылырға, хеҙмәт ролен күтәрергә бына күпме эштәр талап ителгән яҙыусыларҙан. Был дәүер Р.Ниғмәти ижадының артабан үҫеше, яңы баҫҡыҫҡа күтәрелеүе менән характерлана һәм был рәүештә уның “Һаҡмар ҡыҙы” тигән поэмаһы ижад ителә. Был поэмала һуғыштан һуң ауыл кешеләренең тормошҡа, хеҙмәткә мөнәсәбәттәре күрһәтелә.

IV.Яңы тема “Һаҡмар ҡыҙы” поэмаһы.

-Уҡыусылар, слайдта матур, хозур тәбиғәтте күрәбеҙ, кем нисек уйлай, был ниндәй йылға, ни өсөн уның һүрәтен мин дәрескә алдым икән?

- (Һаҡмар).

- Дөрөҫ, ә Һаҡмар йылғаһын күргәнегеҙ бармы? Һаҡмар (урыҫ. Сакмара), Көньяҡ Уралдағы йылға. Яҙма сығанаҡтарҙа Һакмар йылғаһы 1627 йылда теркәлгән. Башланған урыны Әбйәлил районында, Уралтау һыртының көнсығыш битләүендә. Башҡортостандың Әбйәлил, Баймаҡ, Йылайыр, Хәйбулла райондары һәм Ырымбур өлкәһе аша аға. Ырымбур ҡалаһы урынлашҡан урында Яйыҡҡа ҡушыла. Оҙонлоғо 760 км, шуның 348-е Башҡортостанға тура килә. Күренеүенсә, Һаҡмар бик оҙон, бормалы юл үтә. Сылтырап аҡҡан шишмәләр, тиҫтәләгән йылғалар Һаҡмарға ҡоя.Бөтә башҡорт йылғалары араһында ул үҙенсәлекле тәбиғәте, «холҡо» менән айырылып тора. Йә оло ғәйрәт менән текә ҡаяларға бәрелеп, ап-ак күбеккә күмелә, йә дала киңлектәренә сығып, көҙгөләй ялтырап тын ята, йә ҡылымыҡтарға бүленеп, утрауҙар араһында бөтөнләй юғала. Матур ғына түгел, иҫ киткес бай ҙа ул Һаҡмар. Яҙҙарын Һаҡмар буйҙары ҡарап туймаҫлыҡ матур була.

- Поэма ни өсөн “Һакмар кыҙы" тип атала?

- (Сөнки вакиғалар Һакмар буйында бара).

- Эйе, “Һаҡмар ҡыҙы” поэмаһын яҙырға уйлағас, шағир 1950 йылдың йәйендә командировкаға сыға. Баймаҡ районына йүнәлә. Шағир бигерәк тә Һаҡмар буйындағы алдынғы колхоздар тормошон, уңған йәштәрҙең эштәрен өйрәнә. Шағир үҙ поэмаһында Һаҡмарҙы һоҡланып тасуир итә, әммә уның

маҡсаты – ошо йәмле йылға буйында йәшәүсе кешеләр ҡыҙыҡһындыра. Кемдәр һуң улар?

- Бөгөнгө дәресебеҙҙә “Һаҡмар ҡыҙы” поэмаһын анализлау өҫтөндә эшләйәсәкбеҙ. Дәрестең темаһын мин Р. Ниғмәтиҙең “Һаҡмар ҡыҙы”поэмаһында хеҙмәт кешеһе образдары тип атаным. Һәм дәрескә эпиграф итеп З.Биишеваның шиғри юлдарын алдым.

1. Дәфтәрҙәргә числоны,теманы яҙыу.
2. Һүҙлек эше.

1) Партия, Парторг, колхоз, диамат(Диалектический материализм, ҡапма-ҡаршылыҡтарҙың берҙәмлеге һәм көрәше), Ленин (Был һүҙҙәрҙе “историзм” тип атарға мөмкинме?
2) Хеҙмәт кешеһе һүҙбәйләнешен нисек аңлайһығыҙ?
3) Хеҙмәт - кешенең билдәле бер маҡсатҡа йүнәлтелгән эшмәкәрлеге, эш.
4) Ҡара хеҙмәт - ҡул көсө менән башҡарылған ауыр эш.
5) Ябай хеҙмәт - махсус белем талап итмәгән эшмәкәрлек.
6) Ижади хеҙмәт.
7) Хеҙмәт емештәре.

Р.Ниғмәти үҙенең поэмаһында хеҙмәт кешеләрен данлай. Ә поэмала ниндәй осор һүрәтләнә һуң? Ошо осорға характеристика биреп китәйек әле. Поэма нисәнсе йылда яҙылған?

- (1951 йыл. һуғыштан һуңғы осор)
- Һәр осорҙоң үҙ заманаһы кешеләре була. Улар үҙ заманаһының рухи ҡиммәттәренә эйә булалар, һуғыштан һуңғы осорҙа халык ниндәй рухи ҡиммәттәргә эйә булған?
- (Таҡтала түбәндәге яҙыу)

Осор - замана кешеләре - рухи ҡиммәттәр

- (Хеҙмәткә ҡараш юғары булған. Ауыл хужалығы хеҙмәте ижади эш юғарылығына күтәрелгән. Яңы кеше тәрбиәләүҙә хеҙмәт, коллективтың роле ҙур булған).
- “Һаҡмар ҡыҙы" поэмаһында ла һуғыштан һуң колхоз ауылында юғары уңыш өсөн көрәш һәм кешеләрҙең тормошҡа, хеҙмәткә мөнәсәбәттәре күрһәтелә – поэманың төп темаһы. Ә геройҙары кемдәр?
- (Гөлгөл, Фәтхел, Байрам, Яппар)

- Образдар системаһы сылбырын һеҙ нисек күҙ алдына килтерәһегеҙ? Дәфтәрегеҙҙә схемаға һалып карағыҙ. (Уҡыусылар дәфтәрҙәрендә эшләйҙәр, бер укыусы таҡтаға сығып, үҙе төҙөгән схеманы аңлата.)

Гөлгөл Байрам Фәтхел

Яппар

Ни өсөн образдарҙы ошолай айырҙығыҙ?

- (Гөлгөл менән Байрам яңы тормош өсөн, ә Яппар иҫке тормош өсөн көрәшә. Фәтхел улар араһында юғала).

- Ә хәҙер һәр геройға айырым характеристика биреп китәйек әле.

(Гөлгөл - мәктәптә уҡыған, комсомол сафында тәрбиәләнгән.Ул тәрән белемгә һәм юғары мәҙәниәткә эйә. Ҙур теләктәр, ынтылыштар, ижади хеҙмәт менән янып йәшәй).

- Поэмала уның тураһында нимәләр әйтелә, кемдең текстан табып уҡып китәһе килә? ( дәреслектән өҙөк уҡыла)

(Фәтхел - Гөлгөлдөң һөйгән егете. Уның бригадаһы гектарынан150 бот иген ала. Фәтхелдә маһайыу, мин - минлек ҡылыҡтары бик көслө, Фәтхел уҡырға теләмәй)

(Байрам - әҫәрҙә ысын мәғәнәһендә,бар тулылығында етәксе дәрәжәһенә күтәрелгән образ. Байрам хеҙмәт юлының бөтә баҫҡыстарын, ижади хеҙмәт юлын үткән бөгөнгө көн етәксеһе, белемле,киң эрудициялы,кеселекле һәм кешелекле, үҙ эшен, бигерәк тә халыҡты ярата).

(Яппар - Яппар образы аша шағир ауылда еңел тормош менән йәшәүсе хәйләкәр кеше образын асып һала. Иҫке ҡарашлы кеше, яңылыҡҡа шикләнеп ҡарай, уның үҫешенә ҡамасаулай. Ундай кешеләр Фәтхел кеүек ҡайһы саҡта хаталанып киткән кешеләрҙе бөтөнләй юлдан яҙҙырырға ла әҙер торалар).

- Образдарға характеристика бирҙек, ә хәҙер әҫәрҙең төп конфликтын билдәләп үтәйек әле. Әҙәбиәт теорияһын иҫкә төшөрәйек, нимә ул әҫәрҙең конфликты?

- (Ҡапма - ҡаршы яҡтар, фекерҙәр, көстәр араһындағы ҡаршылыҡ) (Ким Әхмәтйәнов “Әҙәбиәт теорияһы”)

- Конфликт – Гөлгөл менән Фәтхел араһындағы фекер ҡаршылыҡтары. Яңы менән иҫкенең бәрелеше, яңының иҫкене еңеүен характерлаусы конфликттар менән осрашабыҙ.

Әҙәбиәт теорияһы буйынса әҫәрҙәң композицион төҙөлөшөн дә күрһәтеп китәйек.

- Ваҡиғалар үҫеше – Фәтхел менән Гөлгөлдөң бергә һөйләшеүҙәре.
- Төйөнләнеү – Фәтхел менән Гөлгөлдөң үҙ ара бәхәсләшеп китеүе.
- Кульминация – Фәтхелдең коллективтан айырылыуы, Яппар кеүек кешеләр ҡотҡоһона бирелеп эсеүгә һалышыуы, уны комсомол йыйылышында тикшереүҙәре.
- Сиселеш – Фәтхелдең үҙ хатаһын аңлауы, иҫкелек ҡараштарын еңеп сыға алыуы.
- Фәтхелгә үҙ хатаһын аңларға кемдәр ярҙам итә?
- Гөлгөл, Байрам, коллектив.
- Тимәк, Шәхесте тәрбиәләгәндә коллективтың роле зур.
- Кем нисек уйлай, әҫәрҙең идеяһы нимәлә һуң?
- Әҫәрҙең идеяһы - коллективтың, хеҙмәттең шәхес тәрбиәләүҙәге роле.
- Ә Яппар образы артабан үҫтереләме?
- Юҡ.
- Был поэтик хата түгел, ә автор бындай кире образдарға ҡарата үҙенең мөнәсәбәтен күрһәтергә теләгән. Тимәк быдай образдар тормош тарафынан онотола. Ә Яппар ул ниндәй кеше булып ҡала?
- (Еңел тормош менән йәшәгән кеше. Хәйләкәр, иҫке ҡарашлы кеше).

Тимәк быдай кешеләр илде алға алып бара аламы?

- Юҡ.

Илгә Р.Ниғмәти әйтеүенсә ниндәй кешеләр кәрәк?

- (Көслө, алдынғы, тырыш, уҡымышлы, эшһөйәр, абруйлы).
- Дөрөҫ, ә хәҙер образдар системаһына әйләнеп ҡайтайыҡ. Ни өсөн геройҙарҙы беҙ ошондай тәртиптә урынлаштырҙыҡ?

- Сөнки Гөлгөл менән Байрам поэмала башҡа йәштәргә өлгө булырлыҡ образдар. Яппар - кире образ. Ә Фәтхел үҙенең маһайыуы арҡаһында хаталанып китә. “Йондоҙ сире” - “Звездная болезнь” менән ауырый башлай. Унын һөҙөмтәләре нимәгә килтерә? (әңгәмәләшеү).

- Шулай итеп, Р. Ниғмәти үҙенең поэмаһында илебеҙ тарафынан ижади эш юғарылығына күтәрелгән ауыл хужалығы хеҙмәтенә дан йырлай. Ә бөгөнгө көндә хеҙмәт кешеһен кем күтәрә? Уларға ҡарата мөнәсәбәт ниндәй?

- Эйе, Башҡортостанда хеҙмәт кешеһенең абруйы юғалманы,уларға хөкүмәт тарафынан иғтибар бүленә, ярҙам күрһәтелә. Беҙҙең милли матбуғат саралары ла ябай хеҙмәт кешеһен маҡтаны, күтәрҙе һәм бөгөн дә ошо йүнәлештә эш алып бара. «Тырыш хеҙмәт килтерер хөрмәт» ти халыҡ мәҡәле. Хеҙмәт кешеһе һәр саҡ иғтибар үҙәгендә ҡаласаҡ. Әҙәбиәтебеҙҙә лә хеҙмәт кешеһе образы ыңғай герой булып ҡалды.

- Хеҙмәт кешеһенең портретын нисек дөйөмләштерергә мөмкин? Ә хәҙер төрлө заман кешеләренең портретын төҙөп ҡарайыҡ.

"Замана геройы"(әҫәр буйынса, 50-се йылдар)

1. Коллективизм тойғоһоноң көслө булыуы.
2. Ил һөйөүсәнлек.
3. Белемгә, яңылыҡҡа ынтылыу.
4. Ауырлыҡтарға бирешмәү.
5. Эш һөйөүсәнлек.
6. Якшы киләсәккә ынтылыу.

“Замана кешеләре” (бөгөнгө көн)

1.Ғаилә тәрбиәһенең роле.
2.Мәктәптә якшы белем алыу.
3.Бер нисә юғары укыу йортон тамамлау.
4.Юғары эш хакы түләнгән урын табыу.
5.Тормошта үҙ урыныңды табыу. ( Эш, ғаилә короу,фатир.)
6.Үҙ-үҙеңде якларлыҡ сифаттарға эйә булыу.
7.Башка милләт кешеләре араһында юғалып ҡалмау.

Ике заманды дөйөмләштергәндә ниндәй портрет килеп сыға?

1. Хеҙмәтте ярат, егәрле бул.
2. Коллективта үҙ урыныңды таба бел.
3. Кешеләр өсөн дә йәшәй белеү кәрәк.

- Киләсәктә беҙ һеҙҙең йөҙөгөҙҙә ошо портретты күрергә теләйбеҙ.

V. Йомғаҡлау.

Уҡытыусының йомғаҡлау һүҙе.

- Илдә үҙгәртеп ҡороуҙар башланғас, Р. Ниғмәтиҙең ижадына яла яғыусылар ҙа табылды. Шағирҙы үҙенең әҫәрҙәрендә коммунистар партияһын данланы, уның әҫәрҙәрен мәктәп программаһынан алып ташларға кәрәк, тейеүселәр булды. Ләкин яҙыусылар Р. Ниғмәти шәхесен, ижадын яҡлап сыҡтылар. Уның әҫәрҙәренең, социалистик ҡоролош осоронда яҙылыуҙарына ҡарамаҫтан, һеҙгә, бөгөнгө көн уҡыусыларына, рухи - әхлаҡи тәрбиә биреүҙәге роле баһалап бөткөһөҙ. Был әҫәрҙәр ижад ителгән йылдарҙағы рухи ҡиммәттәр бөгөнгө көн өсөн айырыуса әһәмиәтле булыуын күңелегеҙгә һеңдерегеҙ. Һәм мин бөгөнгө дәресемде билдәле шағир Риф Мифтаховтың шиғыр юлдары менән тамамлаһым килә:

Дауыл йолҡа ҙур ағасты,
Йыҡмай юҡ-бар ҡыуаҡтарҙы:
Ауҙарһалар юғарынан –
Рух һынмаһа – һин юғары.

VI. Өйгә эш. Мәҡәлә яҙырға, һеҙҙең ауылығыҙҙа ла хеҙмәт алдынғылары барҙыр, улар тураһында яҙыласаҡ поэмалар әле яҙылмағандыр, шулар тураһында мәҡәлә яҙып килегеҙ.

VII.Баһалау.

Уҡытыусы уҡыусыларға билдәләр ҡуя.

## Класс сәғәте

## Тема: Әсәй -мәңге һүнмәҫ ҡояшым!

**Маҡсат:** әсәләргә ҡарата һөйөү, ихтирам тойғолары тәрбиәләү. Уҡыусыларҙың ижади фекерләү ҡеүәһен үҫтереү.

**Йыһазландырыу:** мәҡәлдәр яҙылған карточкалар: “Ата-әсәһен тыңлаған – әҙәм булған, тыңламаған әрәм булған”; “Әсәһенә өргән эт бүре ауыҙына төшөр”; “Әсә күңеле балала, бала күңеле – далала”.

**Дәрес барышы.**

1.Ойоштороу мәле.
2. Инеш әңгәмә.
Уҡытыусы.
Кем ҡулдары өйҙө, ерҙе йәмләй,
Изгелеге – үлсәү тапҡыһыҙ!
Ул – әлбиттә, йәшәү сығанағы,
Тормош ҡото – әсә, ҡатын ҡыҙ.

Был шиғыр кем хаҡында? (Шиғыр юлдарында бөтәбеҙҙең дә иң изге кешеһе – әсә хаҡында һүҙ бара.)

Ер йөҙөндә иң яғымлы, иң ғәзиз һүҙ ул – әсә. Шул һүҙ менән баланың теле асыла, һәм ул бөтә телдәрҙә лә берҙәй наҙлы яңғырай. Әсәнең шәфҡәтле ҡулдарынан килмәгән эш юҡ был донъяла. Әсә йөрәге – иң тоғро һәм һиҙгер йөрәк. Бала яҙмышына ҡағылған һәр ваҡиға әсә йөрәге аша үтә.

Беҙҙең бөгөнгө һөйләшеүҙең темаһы – “Әсәй – мәңге һүнмәҫ ҡояшым!”

Һәр ғәмәлдең төп фекерен билдәләүсе асҡыс була. Уны икенсе төрлө эпиграф тип тә йөрөтәләр. Дәресебеҙҙең эпиграфы итеп

“Әсә күңеле балала, бала күңеле – далала” мәҡәлен алайыҡ. (Мәҡәлдең мәғәнәһен асыу.)
3.“Әсә йөрәге” ҡалмыҡ халыҡ әкиәте менән таныштырыу. Эстәлеге буйынса әңгәмә.

Уҡытыусы. Был әкиәт башҡаларынан нимәһе менән айырыла? (Әкиәттә бәхетле тамамланыш юҡ. Ул – һағышлы.) Ниндәй ҡайғы һағыш бар унда? (Ҡыҙ егетте оло енәйәткә этәрә. Хис-тойғоларҙан аңы томаланған егет донъяла иң ғәзиз кешеһенең ғүмеренә ҡул һала: әсәһенең күкрәген аса ла, йөрәген һурып ала, яратҡан ҡыҙына бүләк итә.) Әкиәттең төп мәғәнәһенә ниндәй фәһем һалынған? Ғәйеп кемдә? (Егеттең ғәйебе ҙур. Сөнки ирмен тигән ир кеше хистәрен ауыҙлыҡлай белергә, иң тәүҙә үҙенең эске тауышын – намыҫына ҡолаҡ һалырға бурыслы.

Беҙҙеңсә, әсәлә лә ғәйеп бар. Ул улында юғарыла әйтелгән сифаттарҙы тәрбиәләй алмаған.)

Уҡытыусы. Нисек уйлайһығыҙ, һүрәтләнгән ваҡиғалар ысынбарлыҡҡа хасмы, әллә уйҙырмаға тартыммы? Халҡыбыҙ кинәйә менән ниндәй фекер еткерергә теләгән? Быға оҡшаш хәлдәр тормошта ҡабатланмаһын өсөн һәр кем үҙендә нидәй сифаттарҙы тәрбиәләргә бурыслы? (Яуаптар.)
Уҡытыусы. Ә хәҙер беҙҙең тормошта йыш осраған хәл-ваҡиғаларға күҙ һалайыҡ. (Ситуацияларҙы уҡытыусы уҡып ишеттерә)
А) Азат иртән мәктәпкә оҙатып ҡалған әсәһенә: “Бөгөн дәрестән һуң бейеү түңәрәге була”, - тип иҫкәртә. Бейеү түңәрәге тамамлана. Өйгә ҡайтышлай Азат урамда уйнап йөрөгән малайҙар эргәһендә туҡтала, унан һуң иптәшенең өйөнә барып, китап һорап ала. Кис етә. Ҡараңғы төшә. Малай саҡ өйгә ҡайтып инә.

Үҙегеҙҙе Азаттың әсәһе урынына ҡуйып ҡарағыҙ, унын уй-кисерештәрен һүрәтләгеҙ һәм һығымта яһағыҙ. (Әйткән һүҙеңде үтәмәү, һуңлау – насар ҡылыҡтар)
Б) Әсәһе иртән Ләйсәнгә: “Бөгөн мин эштә бер аҙ тотҡарланам. Өйҙө йыйыштырыу – һинең өҫтә, һеңлеңде ашатырға ла онотма, зинһар”, - ти. Әммә эштән арып ҡайтып кергән әсәне туҙған өй ҡаршы ала. Ләйсән вайымһыҙ рәүештә компьютер алдында

ултыра, ә бәләкәс һеңлеһе илай. Әсәнең был мәлдәге борсолоуҙарынан сығып ниндәй һығымта яһарһығыҙ? (Тирә – йүндәгеләргә иғтибарлыраҡ булырға кәрәк. Әсәләр һораған ваҡытта ғына түгел, ә ҡулдан килгән бөтә эш менән дә ярҙам итеү – беҙҙең бурыс.)
В) Гүзәл әсәһенән джинсы салбар алып биреүен үтенеп һорай. “Бөтәһенеке лә бар, минеке генә юҡ” тип тә өҫтәй. Әсәһенең “аҡса юҡ” тигәнен ҡыҙ аңларға ла теләмәй, “һин мине яратмайһың” тип илай һәм өйҙән бөтөнләйгә сығып китеү менән янай.

Был осраҡта ниндәй кәңәш бирерһегеҙ? Һеҙҙең менән ошоға оҡшаш хәлдәр булғаны бармы? (Әсә менән бала бер-береһен аңламаған осраҡта ике яҡтың да уртаҡ фекергә килергә тырышыуын, бер-береһе менән килешеү юлдарын эҙләүе мотлаҡ.)

Уҡытыусы. Беҙ әсәйҙәребеҙҙе ярата, ҡәҙерләй беләбеҙме? Ғәзиздәребеҙҙең күҙҙәрендә тик йылмайыу осҡондары сағылһын, улар һәр саҡ көләс йөҙлө булһын өсөн беҙ ни эшләй алабыҙ? (Уҡыусыларҙың яуаптарынан сығып дөйөм һығымта яһала.)

Уҡытыусы.
Әсә күңеле – ҡояш, тиҙәр,
Унда – күпме яҡтылыҡ.
Шул күңелдең яҡтыһынан
Тормош тағы балҡып китә,
Ерҙә арта яҡшылыҡ.

Хәҙер әсә образына дөйөм ҡылыҡһырлама биреп ҡарайыҡ. Бының өсөн бөтәгеҙ ҙә бер генә һорауға яуап яҙығыҙ: мин әсәйемдең ниндәй һыҙаттарын ихтирам итәм? (Үҙ аллы эште тамамлағас уҡыусылар үҙ әсәләре хаҡында һөйләй.)

Уҡытыусы. Йылы һүҙ – йән аҙығы. Әсәләрегеҙҙең күҙҙәренә ҡарап яғымлы һүҙҙәрҙе йышыраҡ әйтегеҙ, уға ҡарата булған хис-тойғоларығыҙҙы белдереүҙән тартынмағыҙ.
4. Тест һорауҙарына яуап биреү.
Уҡыусыларға һорауҙар яҙылған ҡағыҙҙар таратып бирелә.

Уҡытыусы. Иғтибарлығығыҙҙы һынау өсөн ябай ғына тест үткәрәйек. Бының өсөн алдығыҙҙағы ҡағыҙға һорауҙар тәңгеленә яуаптар яҙып сығығыҙ.

Һорауҙар.

1.Әсәйең ҡайҙа һәм кем булып эшләй?

2.Уның эше һиңә оҡшаймы?

3.Ни өсөн?

4.Уның тыуған көнө, айы, йылы ҡасан?

5.Яңы йыл байрамына әсәйеңә нимә бүләк иттең?

6.Уның яратҡан аш-һыуы?

7.Әсәйең ниндәй телетапшырыуҙарҙы айырыуса яратып ҡарай?

8.Әле уҡыған китабының исемен, авторын яҙ.

9.Яратҡан йырсыһы кем?

10.Үҙе ниндәй йырҙы йырларға ярата?

Ә хәҙер иғтибар менән дәфтәрҙәрегеҙгә ҡарағыҙ. Кем бөтә һорауҙарға ла яуап бирә алды? Үҙегеҙҙе иғтибарлы, ихтирамлы һәм игелекле бала тип иҫәпләй алаһығыҙмы? Әллә ғәмһеҙме? Һығымтаны һәр кем үҙе яһаһын.

5. Йомғаҡлау.

Уҡытыусы. Әсә хәстәрлеге һәм сабырлығы менән донъяла иң ҙур һәм ныҡ ҡәлғә – ғаилә төҙөлә. Тимәк, Тыуған илебеҙ киләсәге лә улар иңендә. Беҙҙең бурыс – иң бөйөк кеше – Әсәгә сикһеҙ хөрмәтебеҙҙе, мөхәббәтебеҙҙе белдереү, еңел булмаған тормошто, хеҙмәте алдында баш эйеү һәм үҙебеҙҙең күңел яҡтылығын бүләк итеү.

**Класс сәғәте**

**Тема: Илеш йырсыһы.**

**Маҡсат:** С.Поварисовтың тормош юлын, ижадының Илешкә арналған ерлеген танышыу; уҡыусыларҙа яҡташыбыҙға ҡарата ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу; һөйләү ҡеүәһен үҫтереү; әҙәбиәткә һөйөү тәрбиәләү.

**Йыһазландырыу:** ноутбук, презентация, проектор, сабата.

Класс сәғәтенең барышы:

1. **Ойоштороу мәле.**
2. **Уҡытыусының инеш һүҙе.**

Суфиян Поварисов 90 йәшлек юбилейына – Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, лингвистика фәне профессоры, Башҡортостан һәм Татарстан Республикаһының фән эшмәкәре, Рәсәй Федерацияһы юғары мәғарифының Почетлы хеҙмәткәре, Ғәлимйән Ибраһимов исемендәге премия лауреаты, бихисап китап авторы, тюркология донъяһында күренекле стилист, ижадсы, күренекле яугир яҙыусы булып, ҙур хөрмәткә лайыҡ булып килеп етте. Уның әҫәрҙәре бөгөнгө көндә лә актуаль һәм мауыҡтырғыс, тарихи факттар, реаллек менән һуғарылып, әҙәби әҫәр ҡанундары менән ижад ителгән.

Суфиян Поварисов – бала сағы ауыр йылдарға тура килгән быуын вәкиле. Шуға ла уның әҫәрҙәре тәрән йөкмәткеле, драматик яҙмышлы, ныҡлы сынығыу алған шәхес-образдарға бай. Үҙ ижадын шағир булып

башлап ебәргән С.Поварисов әҙәбиәттең драматургия, публицистика, әҙәби тәнҡит, айырыуса проза тармағында, тел ғилеменең стилистика өлкәһендә байтаҡ китап-монография, уҡыу-уҡытыу әсбәптәре һәм йөҙәрләгән публицистик, фәнни хеҙмәттәре менән киң танылыу яуланы. Шуға күрә уның геройҙары ла – бергә яуҙа йөрөгән полкташтары, Илешебеҙҙең игенселәре, хеҙмәт батырҙары, граждандар һуғышы ҡаһармандары. Шуныһы ла мауыҡтырғыс һәм ҡыҙыҡлы: айырыуса автор гүзәл ҡатын-ҡыҙ образдарын тыуҙырыуҙа күп эшләгән һәм әлеге көндә лә сафта.

Яҙыусы ижадын күҙаллағанда төрлө йүнәлештәрҙе билдәләп үтергә мөмкин. Ул-ер улы. Тыумышы уның – Илеш ере. Ҙур оҫталыҡ менән документаль материалдар менән эш итеүсән яҙыусы. Тормош менән тығыҙ бәйләнештә йәшәй. Тыуған яғы менән тығыҙ мөнәсәбәттә. Әҫәрҙәрендә, публицистикаһында үҙенең иң яҡын кешеләрен төп геройҙары итеп кәүҙәләндергән, үҙ бәхетен үҙ ҡулдары менән булдырыусы яҡташтарын дөйөмләштереүгә ижадының күпселек өлөшөн арнаған икенсе бер яҙыусыны атауы мөмкинме икән! Ул беҙҙең Илеш районына йәне-тәне менән беркеп, райондаштарыбыҙҙың мөкиббән бирелгән үҙ яҙыусыбыҙ. “Бәхет тураһында легенда”, “Биш партизан”, “Ауыл яҙмышы – кем ҡулында” һәм башҡа әҫәрҙәрендә асыҡ күренә.

Суфиян ағай әҫәрҙәре ҙур иғтибарға лайыҡ, улар үҙенсәлекле бай йөкмәткеле, тәрән аҡыллы, һоҡландырғыс. Ә шулай ҙа әҙибебеҙҙең әҫәрҙәре беҙҙең мәктәп дәреслектәренә индерелмәгән.

3. **11 класс уҡыусыһының сығышы.**
(Презентация ҡулланып яҙыусының тормош юлы менән таныштыра)

1924 йыл. 29 август. Илеш районының Тыпый ауылында шалҡандай бер малай ауаҙ һала донъяға. Ап-аҡ битле. Зәңгәр күҙле. Атаһы Шәмсетдин мулла бик ижтиһадлы, хеҙмәт һөйөүсән, күтәренке күңелле кеше була. Граждандар һуғышынан һуң ике ҡатлы йорт һалып, еләк-емеш баҡсаһы яһай. Бөтә ауыл халҡын йәшеллек эсендә йәшәтеү тураһында хыяллана. Ләкин 1925 йылда көтөлмәгән фажиға уны, кескәй балаларын етем ҡалдырып, мәңгелек донъяһына алып китә. Әсәһе, Әсмәбикә абыстай, алты бала менән ҡала: иң өлкәненә – 11, Суфиянға бер йәш була.

Ап-аҡ сырайлы, зәңгәр күҙле Суфиян, дүртенсе класты тамамлағас, уҡыуын ташлап, сабата үрә башлай. Сөнки тыуған ауылында ете йыллыҡ мәктәп булмай, ә барып уҡып йөрөргә аҡсалары етеңкерәмәй. Етмәһә, ғаилә репрессия ҡорбанына дусар була. Әсмәбикә абыстай алты балаһы менән урамға ырғытыла. Ике ҡатлы йортто ҡайҙалыр һүтеп алып киткәс, уның урынына колхоз ат аҙбары яһай. Ауыл уртаһында балҡып торған йорттан бер нимәлә ҡалмай.

Бер йылдан һуң ауылдарында бишенсе класс асыла. Ул тағы ла парта артына ултыра. Уҡыуын тырышып дауам итә, шул уҡ ваҡытта ғаиләһенә ярҙам итер өсөн сабата үреүҙе лә ташламай, дауам итә. Сабатаны ныҡ та, күп тә, матур итеп тә яһай ул. Сабата унық өҫтөн бөтәйтә, тамағын туйҙыра. Баҙарҙа бик тиҙ һатыла. Тирә-яҡта "Суфиян сабатаһы" тигән һүҙҙәр йөрөй башлай. Сабатаны ул талантының шишмә башы ти. Хатта сағыштырыу ҙа ҡуллана: "Сабата, ете йүкәнән үрелә. Бөтә талантым шул ете йүкәлә. Береһендә – публицистика, икенсеһендә – поэзия, өсөнсөһөндә – проза, дүртенсеһендә – драматургия, бишенсеһендә – тәнҡитсе булыуым, алтынсыһында – вуз уҡытыусыһы, етенсеһендә – фәнни хеҙмәт ҡаҙаныштарым".

Етенсе класты тамамлағас колхоз эшенә тотона: тырма тырмата, һабан һөрә, көлтә ташый, ҡыштарын туң тиреҫ саба, урмандан бүрәнә ташый. Ана шунда унық физик көсө генә түгел, рухи егәрлеге нығый.

1942 йыл. Армия. Фронт. Украина, Польша, Румыния, Венгрия, Германия, Чехословакия ерҙәрен фашизм ҡоллоғонан азат итеүҙә ҡатнаша. 469 полк минометы расчеты командиры булла. "Дан", "Бөйөк Ватан һуғышы" ордендары һәм ун биш медаль биҙәй унық күкрәген. Бөтә күрһәткән батырлыҡтыра өсөн

Башглавнокомандующий тарафынан 21благодарность (рәхмәт) белдерелә.

Һуғыштан һуң яҙмыш елдәре уны Йыраҡ Көнсығышта, Себерҙә, Ҡазахстан далаларында, Ҡырғыҙстанда, Үзбәкстанда, Татарстанда йөрөтә.

Һуңынан ул урта мәктәптә хәрби етәксе булып эшләй. Шул уҡ ваҡытта Суфиян Поварисов үҙе лә уҡый. Ҡулына аттестат алғас, 1951йылда Ҡазан дәүләт педагогия институтының тарих-филология факультетына уҡырға инә. Уны Ҡыҙыл дипломға тамамлағандан һуң, өс йыл мәктәп директоры булып эшләй. “Ҡызыл таң” гәзитенең нефть-химия бүлегендә лә хеҙмәт итеп ала.

1960 йылда Башҡорт дәүләт университетына уҡытырға бара. Кандидатлыҡ диссертацияһын яҡлай, доцент була. Докторлыҡ яҡлап, профессор дәрәжәһенә күтәрелә. Хәҙер инде ул дәүеребеҙҙең бөйөк ғалимы, халыҡ шағире, Башҡортостаныбыҙҙың Аҡһаҡалы.

4. **Ижад емештәре.**
   - Уҡыусылар, ә һеҙ унның ижады менән танышмы, Илешкә арналған ниндәй әҫәрҙәрен беләһегеҙ?

Яҡынса яуаптар: **(**Суфиян ағайҙың ижады 1953 йылда “Бәхет” шиғырынан башланып китә. “Сөмбөл”, “Ышанам һиңә”, “Бәхет тураһында легенда”, “Биш

партизан”, “Ауыл яҙмышы кем ҡулында?”, “Ер һулышы”, “60 йәшлек Илеш”)

- Дөрөҫ уҡыусылар, күптән түгел, 90 йәшлек юбилейына тағы ла бер китабы сыҡты “Аҡ ҡайынлы Илешем” тип атала. Бөгөн мин һеҙҙе ошо йыйынтығы менән таныштырып китәһем килә.
- Китапҡа байҡау яһау.

## 5.Тыпый ауылындағы музейы.

- Уҡыусыларҙы телдән, фотоһүрәттәр ярҙамында музей менән таныштырыу.

Илеш районының йәмле Тыпый ауылында тыуған беҙҙең юбилярыбыҙ. Ауылдың тап уртаһында ике ҡатлы ҙур мәктәп урынлашҡан. Әммә ҡыҙғанысҡа ҡаршы был мәктәптә бөгөнгө көндә ни бары ете генә уҡыусы бар һәм уларға белемде бер уҡытыусы бирә.

Музей 2004 йылдың 11 сентябрында барлыҡҡа килә. Тулы исеме “Суфиян Поварисовтың тарих һәм әҙәбиәт музейы”. Профиле: тыуған яҡты өйрәнеү. Был музейҙа әҙибебеҙҙең тормош һәм ижад юлына арналған стендтар, ҡулъяҙмалары, үҙе бүләк иткән китаптары һаҡлана. Музей етәксеһе Әлфиә Әйүп ҡыҙы әйтеүенсә, музей асылған көндө Башҡортостандың яҙыусылар союзынан Риф Тойғон, драматург Нәжип Асанбаев, яҙыусы Азамат Мағазов, шағир Марат Кәрим, профессо, тәнҡитсе Суфиян Сафуанов, филология фәндәре докторы,, профессор Әхәт Ниғмәтуллин, “Ағиҙел”журналы мөхәррире Сабир Шәрипов һәм

яҙыусыбыҙ үҙе килде. Төрлө стендтар музейҙың стеналарын биҙәй, шуныһы ғына үкенесле улар бөтәһе лә татар телендә.

**6. «Биш партизан бәйете” (тулыһынса уҡып анализлау).**

Бәйет – йәнәш рифма менән килгән ике юллыҡ шиғыр. Унда халыҡ һәм айырым кешеләрҙең яҙмышына, йәшәүенә бәйле фажиғәле ваҡиғалар хаҡында һөйләүсе драматик йөкмәткеле шиғри әҫәргә әйтәләр. Йөкмәткеләре буйынса бәйеттәр өс ҙур төркөмгә бүленә: тарихи бәйеттәр, тормош-көнкүреш бәйеттәре, фажиғә ерлегендә тыуған бәйеттәр. “Биш партизан” бәйете өсөнсө төркөмгә ҡарай. Дөмәй халҡы өсөн ҙур фажиғә булған ауылдаштарының, әсә кешенең, егеттәрҙең аяныслы үлеме. Бер нисә көн үткәс улар йәшерен йыйнаулашып ошо бәйетте ижад итәләр һәм ни тиклем генә ваҡыт даръяһы аҡмаһын, бәйет бер өлөшөн дә юғалтмайынса, беҙҙең көндәргәсә килеп етә.

“Кеше күңеле тарих көҙгөһөндә сағылып ҡалған бер генә күренешекә лә битараф була алмай. Яҡшыһын да, яманын да, ағын да, ҡараһын да, ҙурын да, бәләкәйен дә – бөтәһен дә күңеленә беркетә бара. Халыҡ тереләй күмелгәндәрҙе бөтәһен дә партизан тип атаны. Ауыл халҡы “Биш партизан” тигән бәйет ижад итте. Тимәк, был ҡанлы ваҡиға иң тәүҙә кеше күңелендәге китапҡа яҙылды”

# Китап уҡыу – тормошто өйрәнеү...

**”Бәхетле булһын бала саҡ”**
**Айгиз Баймөхәмәтов “Калдырма мине әсәй” (китап уҡыусылар конференцияһы)**

Мәҡәлдәр: Етем хаҡы ебәрмәç.
Етем күңеле- бер киçәк.
Етем йәше ерҙә ятмаç.
Етем илаһа- ер –һыу илар.
Етем баланың күңеле китек.
Донъяла ни әсе?
-Етемлек әсеһе әсе.
Етем бала ырыçы ерҙән, ерҙән булмаһа илдән.
Етем бала тип кәмһетмә: бәхете булһа ир булыр
(Етемдәр тураһында видеоролик)
1-се алып барыусы: Хәйерле көн һеҙгә, хәйерле көн
Хәйерле көн дуçтар, туғандар,
Хәйерле көн ижад һөйөүселәр
Уңған ҡыҙҙар һәм дә уландар!
2-се алып барыусы: Хәйерле көн, күңелкәйегеҙ,
Көн ҡояштай якты саф булһын.
Хәйлә мәкер яла ялғандарҙан
Йәҙөгөҙ пак, азат ,шат булһын.
1-се алып барыусы: Кеше донъяла ни менәндер мауыҡмай тороп йәшәй алмайҙыр. Берәү сәйәсәт өлкәһендә йөҙә, икенсеһе донъя сәхнәһен яулай, өсөнсөһө бизнесҡа бирелә. Әммә, минеңсә,кешегә иң ҡәҙерлеһе һәм уға ғүмерлек серҙәш, белем шишмәһе булғаны- китаптыр.
2-се алып барыусы: Китап- ул кеше аҡылы тапҡан мөғжизәләрҙең береһе. Аҡыл йыйылмаһы. Борон китапты яҡшы ат биреп һатып алғандар. Китап һирәк кешеләр ҡулында булған, байлыҡтың байлығы һаналған.

1-се алып барыусы: Китапта ижадсының уй хыялдары, һағыш моңо,бар булмышы. Әҙәпһеҙҙәрҙән ғибрәт алырға өндәй. Шәфҡәтле, изгелекле, мәрхәмәтле, сабыр, тоғро булырға саҡыра
.2-се алып барыусы: Бына бөгөн беҙ һеҙҙең менән Айгиз Баймөхәмәтовтың " Ҡалдырма, әсәй!” повесы буйынса китап уҡыусылар конференцияһына йыйылдыҡ.
1-се алып барыусы: Нимә ул детдом?( детдомда балаларҙы кем ҡарай, кейемдәре нисек, йәмғиәттә ниндәй ҡараш?). Башҡортостанда 18 мең бала етем…(матбуғат биттәренән һандар алып әйтергә була
Уҡыусылар китаптан өҙөк күрһәтә: директор, тәрбиәсе, балалар. (детдомдың бер көнө) (Һаумыһығыҙ,…- Ярай, Мәүлиҙә Нурғәлиевна.33-34 се биттәр, диалог итеп һөйләргә, автор һүҙен ҡалдыр)
2-се алып барыусы: Балалар, тағы ниндәйерәк етемдәр йәшәй был детдомда?
-Әмиләне үкһеҙ етем тип әйтеп буламы? (Әсәһе төрмәлә…)
-Фәрит нисек детдомға килеп эләгә? (Атаһы иҫереп әсәһен туҡмаған, әсәһе үлә, атаһы сиғандарға һеңлеһен һатып ебәрә. Яңы ҡатын алгас Фәритте детдомға бирәләр).
1-се алып барыусы: Балалар йортонда ата-әсәһе иҫән булып та ата-әсә хоҡуғынан мәхрүм ителгәндәрҙең балалары күпселек. Уйлап ҡараһаң Бөйөк Ватан һуғышы осоро етемдәре менән бер. 90%. Сәбәбе нимәлә? (эскеселек, наркомания)
Бар шундай ҡанһыҙ ата-әсәләр: улар балаларын яфалап төрлө хәлдә тукмап үлтерәләр, зәғиф булып ҡалалар. Россияла йылына 20-30мең бала яфаланып үлә.
Диалог формаһында уҡыу: Әсә менән Ильястың һөйләшеүе.
2-се алып барыусы: Әлбиттә ата-әсә наҙын детдом бирә алмай, эскесеме, сирлеме, бала тик якшы яктарҙы ғына иҫенә төшөрә, хәтерләй, бәләкәй генә йылы мөнәсәбәтте лә онота алмай хәтер төйөнөнә һалып ҡуя.
1-се алып барыусы: Детдомда ҡарар сыға. Ильясҡа яза бирелә. Нимә була Ильяс менән?
( Китаптан өҙөк укып ишеттерелә 86-сы бит)…Даян ялан аяк ҡарҙан йүгертә, гараж алдында боҙға аяғы йыртыла, иҫтән яҙа)

- Кем ул Даян? ( Ильястан бер нисә йәшкә олораҡ, көслө, тәрбиәселәргә тәртип һаҡларға ярҙам итә.) (Дедовщина. Автор беренселәрҙән булып детдом эсендәге "дедовщинаны" яҙа)
2-се алып барыусы: Нисек уйлайһығыҙ, ысынлап та бөгөнгө көндә бармы ул? ( интернетка төшөрөлгән видео роликты карау)
- Тәрбиәселәр үҙҙәренә ярҙамға олораҡтарға тәртип һаҡларға ҡушалар. Һеҙ килешәһегеҙме?Дөрөҫмө?
- Әҫәрҙә ҡайһы тәрбиәселәрҙе балалар менән эшләргә лайыҡ түгел тип әйтә алаһығыҙ? (Рәйфә менән Мәүлиҙә Нурғәли кыҙы тупаҫ, ҡаты бәғерле, уҫал, балаларҙы яратмайҙар. Мәүлиҙә Нурғәли кыҙы экиәттәге хәйләкәр,яуыз итеп күрһәтелә.)
- Бөтә тәрбиәселәр ҙә шулаймы?(Хәкимә, Флүрә апайҙар алсаҡ, яғымлы, балалар менән әрләшеп, талашып та бармайҙар, изге күңелле)
1-се алып барыусы: Ә автор уҡытыусылар тураһында нимә тип әйтә? (150-с е бит)
Һығымта. Автор уҡытыусы, тәрбиәселәргә рәхмәтле, сөнки геройыбыҙ тормошта үҙ урынын тапҡан. Барыһын да бер ҡалыпҡа һалырға ярамай.Уҡытыусы ғәҙел, яғымлы һәм шул уҡ ваҡытта талапсан да булырға тейеш. Сөнки был балаларға артабан атай-әсәй ролен дә үтәргә кәрәк. Киләсәктә уҡытыусы һөнәрен һайлаһағыҙ, кем балаларҙы ярата, шул ғына барһын.
2-се алып барыусы: Даян геройыбыҙҙы тыныс ҡалдырмай. Ильяс менән Фәриткә кәнфит урларға ҡуша, 8 март байрамына 50 һум табырға ҡуша. Малайҙар ни эшләйҙәр? Урлашалармы?...
Һығымта. Моғайын автор быниң менән бәләкәйҙән тәрбиәле,түҙемле бала булырға, ниндәй генә ауырлыҡтар, төрлө һынауҙар булмаһын, сабыр,изгелекле, кешелекле булып калырға өндәй.
1-се алып барыусы: Әҫәрҙә ошо малайҙарҙың йөҙөндә киләсәге сағылған Рәсәйҙе ни көтә?
- Малайҙарҙың яҙмышы нисек дауам итә?
2-се алып барыусы: Фәрит ниндәйерәк малай?( матур һүрәт төшөрә, шиғырҙар яҙа,бәләкәй генә нәмәнән дә мөғжизә таба белә, зирәк, яҡшы дуҫ, игелекле, сабыр, аҡса табып килтермәгән өсөн тумбочкаға ултыртып икенсе ҡаттан Даян бәрә, үлә.)

1-се алып барыусы: Кеше туҡмап, талап йөрөгән Даянға тәрбиәселәр бер һүҙҙә әйтмәй. Ләкин детдомдан сыҡҡас Даян барыбер юҡҡа сыға.
- Ни өсөн?(сөнки насар юлға кесе йәштән үк төшкән, урлаша,тәмәке тарта, эсә, асарбаҡҡа әйләнә)
2-се алып барыусы: Ильястың яҙмышы нисек дауам итә? (сабыр, аҡыллы, яҡшы укый, туғанлыҡлы, үҙ маҡсатына ирешә. 9 - сы класты тамамлағас,11-се класҡа ҡалдырыуҙарын һорап министрға хат яҙа. Имтиханға ныҡлы әҙерләнеп үҙ теләге менән юғары уҡыу йортона инә)
1-се алып барыусы: Шундай бер ер бар был китапта: атаһы ниндәй аманат тураһында һөйләй башлағайны?
Повесть Ильяс исеменән һөйләнә. Кем яҙған һуң был әҫәрҙе тигән һорау тыуманымы? - Был автобиографик әҫәр.
(Айгиз Баймөхәмәтов тураһында видеоролик)
Автор Айгиз Баймөхәмәтов 1988 йылда Белорет районы Абҙаҡ ауылында күп балалы ғаиләлә тыуған. Сабый сағында уҡ етем ҡалған. Ильяс образы аша автор үҙ башынан үткән ваҡиғаларҙы бәйән итә. Кешеләргә, донъяға сабый күңеле менән бағып, һығымталар, асыштар яһай. Айгиз БДУ-ның башҡорт филология факультетын тамамлай. Бөгөнгө көндә "Башҡортостан” гәзитенең әҙәбиәт һәм мәҙәниәт бүлегендә эшләй. Ижад итә.
2-се алып барыусы: Был әҫәр менән автор йәмғиәткә, кешеләргә өндәшә, ата-әсәләре иҫән булып та балалар йортонда тәрбиәләнгән ата- әсәләргә өндәшә. Иркәләү, наҙ кәрәк уларға. Балалар детдомдан колонияға эләкмәһен өсөн уларҙы йәлләргә кәрәкмәй, ә ысын күңелдән яратырға кәрәк.
Дәүләт тарафынан ниндәй эштәр алып барыла һуң?( патронаж ғаилә…)
1-се алып барыусы:
-Нимәгә өйрәтә һуң был әҫәр беҙҙе?
2-се алып барыусы: Китап- ул үҙе мөғжизәле донъя. Ошо бәләкәй генә китап илебеҙ өҫтөндәге ҙур проблеманы күрһәтте. Уйландырҙы ла, илатты ла. Тормошта дөрөҫ юл табырға, кешелекле бер-береңә мәрхәмәтле булырға өндәй.
Уҡыусы уҡыуында Т. Ғәниеваның “Әсә балаһы” шиғыры.

# Т.Ғарипова ”Илекәй” повесы буйынса

# китап укыусылар конференцияһы.

Зал Илекәй повесе буйынса төшөрөлгән һүрәттәр, плакаттар, менән биҙәлгән.Талғын көй аҫтында алып барыусылар кисәне башлай.

*Китап күргәзмәһе "Ғорур атлап ғүмер үренә."*

1-се алып барыусы. Һаумыһығыҙ,әҙәбиәт һөйөүсе дуҫтар!

Хәйерле көн, хөрмәтле ҡунаҡтар! Бөгөн беҙ һеҙҙең менән Таңсулпан Ғарипованың "Илекәй" повесы тураһында һөйләшергә йыйылдыҡ.

Таңсулпан Ғарипова — башҡорт прозаһына һәм драматургияһына тос өлөш индергән әҙибә. Ҡайһы ғына әҫәрен алып ҡарама, унда яҙыусының ихлас ижадын күреп ҡыуанаһың. Ихласлыҡ, әүҙем ижади эшмәкәрлек ҡайҙан килә һуң? Минең уйымса, үҙ халҡыңа выжданың, намыҫы менән бирелеп хеҙмәт итеүҙәлер.

Тансулпан Хизбулла ҡыҙы 1947 йылнын 22 сентябрендә йәмле Ирәндек буйҙарында урынлашҡан Баймаҡ районының Күсәй ауылында доньяға килгән, 1966 йылды урта мәктәпте тамамлаған, 1968 йылды Башҡорт дәүләт университетына уҡырға инә, уны тамамлағас Әҙәбиәт, тел, тарих институтында эшләй. Һуңырак Баймаҡ ҡалаһында икенсе һанлы мәктәптә туған тел укытыусыһы һәм директор урынбаҫары вазифаһын башҡара. Киләһе тормош юлдары уны Учалы музыкаль училищеһының фольклор бүлегенә илтә. 1995-се йылдың аҙағында хакимиәт саҡырыуы буйынса муниципаль телевидениеһы редактор урынбаҫары, 1996 башлап 2000 йылға тиклем Сибай яҙыусылар берлеген етәкләй. Һуңыраҡ "Ватандаш" журналында эшләй.

Әҙәбиәткә Тансулпан Ғарипова 70 - се йылдарҙа инә.Унең беренсе хикәйәләр йыйынтыгы "Ялан сейәһе" 1978 йылды баҫтырыла. Беренсе адымдарҙан уҡ Таңсулпан Хизбулла кыҙы үҙен һүҙ оҫтаһы итеп күрһәтте, уның әҫәрҙәре үҙенсәлек менән айырылып торҙо. Таңсулпандың хикәйәләрендә,

повестарында, романдарында, драма әҫәрҙәрендә халыҡтың йәшәү рәүешенең төрлө төҫтәре, биҙәктәре ята. Заман сәйәсәтенә, тормош ҡанундарына дөрөҫ, ғәҙел баһа биреү ҙә әҙибәне, уның абруйын күтәрәлер. Туған халҡы, йәғни меңәрләгән уҡыусыһы уны үҙ итте. Башҡортостанда ғына түгел, Ырымбур, Һамар өлкәләрендә лә, китап кәштәләрҙә бик ҙаҡ тора алманы. Ошо уҡ әҫәр 2004 йылда “Башҡортостан” гәзитендә “Йыл китабы” тип иғлан ителде. Бындай бәхет, йәғни халыҡ күңелендә тиҙ арала танылыу, бик һирәк яҙыусыға насип була. 2006 йылды Таңсулпан Ғәриповаға Салауат Юлаев исемендәге Башкортостандын Дәүләт премияһы бирелде.

Аҙаҡы йылдарҙа Тансулпан Ғарипова драма әҫәрҙәре өҫтөндә эшләй.

Уның пьесалары Башҡортостандың барлыҡ театрҙарында ла уңышлы күрһәтелә. “Йәйге таш” исемле киноповесы буйынса тулы метражлы “Сөмбөлдөң етенсе йәйе” тигән нәфис фильм төшөрөлдө, ул Мәскәүҙә уҙған Халыҡ-ара кинофестивалдә “Алтын фил” премияһына лайыҡ була.

*Иҙге һуғыш йыры яңгырай(А.Александров көйө,В.Лебедев-Кумач һүҙҙәре)*

1-се алып барыусы: Һуғыш...Биш кенә хәрефтән торған ошо һүҙ илебеҙгә, ғазап-михнәт, аслыҡ-яланғаслыҡ, етемлек алып килде. Бөйөк Ватан һуғышындағы юғалтыу 26,6 миллион кеше иҫәпләнә, шуларҙың 8,6 миллионы - һалдат һәм офицерҙар. 1418 көн дауам иткән һуғышка һәр көн 10 меңдән артыҡ кеше һәләк булған тигән һүҙ. Һуғыштан һуңғы емереклектәр алған кешеләр, етем ҡалған балалар, тол ҡалған ҡатындар, Бухенвальд, Освенцим кеүек концлагерҙар, тылдағы халыҡтың Бөйөк Еңеү хаҡына тиңдәшһеҙ хеҙмәте, түҙемлеге, сыҙамлығы-быларҙың бөтәһе тураһында яҙып та, һөйләп тә бөтөрөрлөк түгел.

1-се алып барыусы: Минең ҡулда – һеҙгә таныш китап. Китаптағы ниндәй повесты укып сыҡтыҡ? Әйе, бөгөн беҙ һеҙҙен менән Таңсулпан апайҙың “Илекәй” повесы тураһында һөйләшергә йыйылдыҡ.

Ә хәҙер иғтибар менән буктрейлер ҡарап үтәйек.
*(Буктрейлер күрһәтелә)*
2-се алып барыусы: Таңсулпан Ғарипова повесты 2010 йылда Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 65 йыллығына бағышлап яҙған. Уҡыусылар, һеҙ һуғыш темаһына яҙылған бик күп әҫәрҙәр менән танышһығыҙ. Иҫкә төшөрәйек: һеҙ уҡыған әҫәрҙәр "Илекәй" повесынан нимәһе менән айырылып тора?

1. Повесть ниндәй ваҡыйғалар менән башланып китә? Ваҡиға нисәнсе йылдарҙа бара?
2. Повестың төп геройҙары кемдәр?
3. Илекәй ауылы кайһы ерҙә урынлашҡан? Унын тарихы нимә тураһында һөйләй?
4. Олатайҙар ауыл булған урында рәт-рәт ҡаҙалып сыҡҡан флажоктарға тап була. Был нимә? Изге урынға өйҙәр төҙөргә итәләрме? Изге Илекәйҙе, илекле ҡырҙы ни көтә?
5. Бар кеше лә аҡсаға һатыламы?Оло быуын менән йәш быуындың ҡараштары, уй-фекерҙәре тап килерме?
6. Әҫәрҙә ниндәй проблемалар күтәрелә һәм улар ни рәүешле хәл ителә? (мөхәббәт, бәләкәй ауылдар, дуҫлыҡ, тыуған ергә тоғролоҡ, ата һүҙен тыңламау, ҡаршылыҡтар, заман проблемалыры, һ.б.)

1 се алып барыусы:

Хәтер мәңгелек ! 1941-1945 йылдар...Илебеҙ тарихында был йылдар ҡан менән яҙылған һәм әлегәсә халыҡ хәтерендә йәшәй. Хәтер йәшәй икән, тимәк беҙ йәшәйбеҙ, үҙебеҙҙең хәтирәләр уйланыуҙар аша беҙ бөгөн килер быуындарға өндәшәбеҙ. Һуғыш тураһында яҙылмай ҡалған юлдарҙы ҡағыҙға төшөрөп тарих яҙабыҙ. Был беҙҙең тарих...

Үрҙә әйтелгәндәрҙе дөйөмләштереп шуны билдәләйбеҙ: Таңсулпан Ғарипова ижадында заман проблемаһы үҙәктә тора. Һуңғы йылдар эсендә заманды сағылдырыуҙа төрлө этапты шәйләргә мөмкин. Баштараҡ ил тормошондағы күҙгә бәрелеп торған тәрән ҡаршылыҡтарҙы һүрәтләп үткән осорҙағыға ҡарағанда һүрәнәйә төштө, тоғролоҡ фәлсәфәһен асыу

мөмкинлеге булманы. Ә Таңсулпан Ғарипова үҙенең әҫәрҙәрендә һәр төрлө законһыҙлыҡҡа, ижтимағи һәм шәхси пландағы әхлаҡи боҙоҡлоҡтарға ҡаршы көрәш, үткәндәге рухи байлыҡтарға мөнәсәбәт һәм бөгөнгө кешенең тарих сылбырындағы урынын асыҡлау, тыуған ергә тоғролоҡ, ижтимағи тормоштағы боҙоуҙар өсөн төрлө кимәлдәге етәкселәрҙең яуаплылығы кеүек проблемаларҙы актив күтәрҙе.

Шулай уҡ илебеҙ халыҡтарының Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында күрһәткән батырлығын яҡтыртыу Таңсулпан Ғарипова прозаһының мөһим темаларының береһе булып ҡалды.

Беҙгә ғүмер бирә ваҡыт.
Үҙ самаһын үҙе белеп
Ғүмер уҙа, хәтер ҡала
Хәтер менән беҙ мәңгелек!

**Фәнни-тикшеренеү эш “Исемдәр донъяһында минең исемем”**
**Үрге Йәркәй 1-се гимназияһының 7-се класс уҡыусыһы**
**Шәйхуллин Денис**

I. Инеш.

Донъяла исемдәр бик күп. Улар үҙҙәренең әйтелеше, яңғырашы менән айырылып тора. Ҡайһы бер халыҡ вәкилдәренең беҙ исеменә ҡарап милләтен билдәләй алабыҙ. Исем кешенең визит карточкаһы, шәхес таныҡлығы һымаҡ. Ул шәхестең ниндәй илдән, ниндәй милләт икәнен күрһәтеп тора. Исемең есемеңә тап килһен. Балаға мәғәнәле исем ҡушырға кәрәк. Исем –ул кешенең ер йөҙөндә булмышын раҫлаусы бер фактор һәм шуның өсөн дә уға ғорурлыҡ тойғоһо өҫтәргә тейеш. Борон быға ныҡ иғтибар иткәндәр һәм шуның өсөн дә исемең есемеңә тап килһен тип теләктәр теләгәндәр. Ғәҙәттә бала йә батыр, йә матур, йә аҡыллы, йә шәжәрәһе буйынса абруйлы кешегә оҡшарға тырыша.

Һәр кем үҙенең исеме яңғыраһын өсөн , әлбиттә бәләкәйҙән алып бик күп көс һалырға: яҡшы уҡырға , матур эштәр башҡарырға,Тыуған иле өсөн хеҙмәт итергә тейеш.

Эҙләнеү-тикшеренеү эшенә дөйөм характеристика.

Эштең тикшереү объекты: 1)исем ҡушыу йолалары;
2)исемем -Денис.

Тикшереү предметы: исемдәрҙең тәрбиәүи әһәмиәте, исемемдең килеп сығышы, мәғәнәһе.

Тикшеренеү эшенең актуаллеге

Быуаттар буйына ижад ителгән “Исемдәр” һәм исем ҡушыу йолалары, бөгөнгө көндә беҙҙең рухи байлығыбыҙҙың ҙур бер өлөшөн тәшкил итә. Заман яңылыҡтарына ынтылып әллә

ниндәй мәғәнәһеҙ исемдәр ҡушыу үҙ тамырҙарыбыҙҙан, исемдәребеҙҙән ситләшеүгә алып килгән проблемалар тыуҙыра. Башҡорт халҡының исем ҡушыу йолаларының тәрбиәүи әһәмиәтен заманса ҡараштарҙан сығып өйрәнеү актуаль мәсьәлә булып тора.

Үҙ исемеңде өйрәнеү - ғаиләңдең, халҡыңдың тарихын өйрәнеү. Һәр бер кеше үҙенең исеменең тәғәйенләнешен, мәғәнәһен белергә тейеш. Үҙемдең исемем бөгөнгө көндә популяр тип, һанайым мин. Кешегә исем тыуғас ҡушыла һәм ғүмере буйы йәнәш атлай. Бөтә кеше лә исемле, әммә бөтәһе лә уның мәғәнәһен беләме икән тигән һорау тыуа. Ә бит был эш бик мауыҡтырғыс һәм ҡыҙыҡлы. Шуның өсөн дә был темаға ҡыҙыҡһыныуым тыуҙы һәм мин уны тикшеренеү эшем итеп билдәләнем.

Проблеманан сығып, эҙләнеү-тикшеренеү эшенең темаһы асыҡланды “Исемдәр донъяһында минең исемем”.

**Эҙләнеү – тикшеренеү эшенең маҡсаты:** исемдәрҙең тәрбиәүи әһәмиәте сағылышын өйрәнеүҙе һәм исемемде өйрәнеүҙе маҡсат итеп ҡуйҙыҡ.
Проблема һәм маҡсатҡа ярашлы шундай бурыстар ҡуйылды:
- исемемдең килеп сығышын асыҡлау;
- исем ҡушыу йолаларын күҙәтеү;
- башҡорт исемдәренең тәрбиәүи мәғәнәһен асыҡлау;
- исем ҡушыу йолаһына әҙәбиәттән миҫал табыу.

Эштең структураһы.
Тикшеренеү эше инештән, төп өлөштән, йомғаҡлауҙан, һығымтанан, ҡулланылған әҙәбиәт исемлегенән тора.

## II. Төп өлөш.

Башҡорт исемдәренең килеп сығышы.

Башҡорт халҡының матур исемдәре бик күп.Уларҙың һәр береһенең мәғәнәһе бар.
Тәбиғәт күренештәренә бәйле исемдәр: Буранбай, Айсыуаҡ, Ҡояш.
Төҫ атамаларынан яһалған исемдәр: Аҡйегет, Ҡарасәс.

Үҫемлек, сәскә атамаларынан яһалған исемдәр: Муйылбикә, Гөлшат, Гөлдәр. Ер-һыу атамаларына бәйле исемдәр: Ирәндек, Урал, Дим.
Таш, төрлө металл атамаларынан яһалған исемдәр: Тимерхан, Айбулат, Алтынбикә, Алмас, Ынйы.

Януар, ҡош-ҡорт атамаларынан яһалған исемдәр:Арыҫлан,Ҡарлуғас,Һандуғас. Тарихи шәхес, халыҡ батырҙары исемдәрен мәңгеләштереп ҡушылған исемдәр: Мөхәммәт,Салауат, Юлай.
Үҙләштерелгән исемдәр төркөмөнә совет дәүерендә барлыҡҡа килгән исемдәр ҡарай. Был төр исемдәрҙең бер тиклеме Октябрь революцияһының кеше аңына, тормошҡа, социаль хәленә индергән яңылыҡтарҙы үҙ эсенә ала. Башҡорт халҡы ла был шауҡымдан ситтә ҡалмаған. Райфа (районный финансовый отдел), Райза (районный земельный отдел), Коммунар исемдәре ошо осорҙа яһалған.

Революция юлбашсыларының исемдәре, революцияға бәйле ваҡиғалар атамалары кеше исеменә әйләнә. Мәҫ., Вил (Владимир Ильич Ленин). Вилена, Ленар (ленинская армия), Маркс, Ким (коммунистический интернационал молодежи), Октябрина, Маш, Рифмир (революционный мир), Марат, Клара, Фрунзе, Феликс һ. б.

Бер төркөм исемдәр Бөйөк Ватан һуғышы осоронда барлыҡҡа килгән. Мәҫ., Анфиса, Флорида, Франгиза, Моряк, Майор, Эльза, Эльвира, Лариса, Лиза һ. б. һуғыштан һуңғы исемдәр араһында бөтөнләй мәғәнәһеҙ исемдәр осратып була. Мәҫ., Рафинад, Винегрет, Лек, Академия, Юрис (юрист), Филиал, Эдик, Венерик һ. б.

**Бала тыуа - донъяға яңы кеше килә.**

Башҡорт халҡы элек-электән яңы тыуған балаға исем ҡушыуға бик яуаплы ҡараған. Исем ҡушыу ғаиләнең генә түгел, ә бала йәшәгән төбәктең байрамына әйләнгән. Һәр кем йәш балаға исем туйы менән ҡотлап, бүләктәр алып килер булған. Ә баланың ата-әсәһе ҡунаҡтарға үҙ бүләктәрен әҙерләгән.

Миҫал өсөн халҡыбыҙҙың бөйөк шағиры М.Кәримдең «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» әҫәрендә исем ҡушыу йолаһын килтерергә булдым. «Бәпес тыуған йортҡа , уның мөлкәтлеме, мөлкәтһеҙме булыуына ҡарамаҫтан, икенсе көндө үк һый ағыла башлай. Күрше күлән, туған-тыумаса, дуҫ-иш, таныш-белеш ҡатындар, тиңдәш әхирәттәр, бала әсәһенә күстәнәс ташый. Берәүҙәр - ҡыҙыу табала ҡоймаҡ, икенселәр – бәлеш, өсөнсөләр- ҡыҫтыбый, дүртенселәр- тултырылған тауыҡ, бишенселәр – ҡатлама, алтынсылар – бауырһаҡ, етенселәр ... тағы ла әллә нәмәләр , әллә нәмәләр килтерә. Һәр кем хәленән килгәнсә лә, артығында тырыштыра, үҙендә булмағанды күршенән үтескә алып тора. Бына ниндәй һыйҙар менән хөрмәтләйҙәр яңы тыуған баланы! Иртәнән кискә тиклем түрҙән самауыр төшмәй.Түр башында мамыҡ мендәр өҫтөндә кендек әбейе ултыра, уның эргәһендә кем тиһегеҙме – мин. Бер аҙна шулай ултырабыҙ. Хатта ашып та китә. Был күркәм тормошто тик бер генә нәмә боҙа. Ул да булһа – бәпес мунсаһы».

Күп ата-әсә балаға исемде алдан уйлап, туғандары менән кәңәшләшеп ҡуша. Исем ҡушҡанда уның яңғырашына, мәғәнәле булыуына, русса –башҡортса әйтелешенә иғтибар итәләр. Бала исемен ғүмер буйы йөрөтә. Исем кешенең бер сифатына әйләнә.Ҡыҙҙар исеменә ҡарағанда, малайҙарға исем ҡушыуҙа ҙур яуаплылыҡ ята, сөнки уларҙың исеме киләсәктә тағы ла бер кешенең исеменә әйләнә.

**Исемдәрҙең тәрбиәүи мәғәнәһе**.

Бала бәләкәйҙән үҙ исеменең мәғәнәһен белеп, исемен яратып үҫһә, унда үҙенең милләтенә ҡарата ғорурлыҡ уяна. Һәр кеше исемен ғорур йөрөтһөн, боҙмаһын, үҙгәртмәһен, оялмаһын,сөнки атай-әсәй был исемде яратып, матур теләктәр менән ҡуша.

Йола буйынса борон тәүге исемде балаға кендек инәһе (кендек әбейе) ҡушҡан. Кендек әбейе яңы тыуған сабыйҙы ҡабул итеп алғас (донъяла һәр нәмәнең, һәр заттың исеме –тамғаһы була тигән ҡараштан сығып), баланың бер ҡулына ебәк еп бәйләй, ҡолағына шыбырлап ҡына ”исемең шулай булһын”, тип

бер исем әйтеп-йүргәккә төргән. Был тәүге исем - «йүргәк исеме» тип аталған. "Йүргәк исеме” һәм ебәк еп баланы төрлө яман заттан, ен-пәрейҙән һаҡлай, тигән ышаныу йәшәгән, һуңынан балаға рәсми исем ҡушыу йолаһы атҡарылған. Исемде ырыу аҡһаҡалдары, ата-бабалар, ололар ҡушҡан. Халыҡ йолаларына, ғөрөф-ғәҙәттәренә нигеҙләнеп барлыҡҡа килгән «исем туйы» үткәрелгән.

Исем ҡушҡанда тик яҡшы теләктәр генә теләгәндәр, бына ошо теләктәрҙең бер-нисәһе:
1.Ата-әсәңә иш булып үҫ!
2.Ауыҙыңда бал да май: телең балдай татлы булһын, эшең майҙай шыма барһын!
3.Изгелекле, игелекле бала бул!
4.Исемеңә тап төшөрмә!
5.Исемеңде сығарма!
6.Ватаныңды данлар бала бул!
7.Исемең үҙеңде үҫтерһен!

## III. Исемем –Денис.

Исемемдең тарих биттәре:
Денис тигән исемде миңә атай-әсәйем ҡушҡан. Был исем Башҡортостанда, Рәсәйҙә генә түгел, ә ер шарының төрлө төбәктәрендә киң таралған. Тимәк, исемем башҡорт исеме түгел икәнен асыҡланым. 20-се быуатҡа тиклем малайҙарҙы сиркәүҙә суҡындырғанда Дионисий тип исемләгәндәр. Халыҡ телендә был исем “Денис” булып таралған.

**Практик өлөшө:**

1.Денис исеменең төрлө телдәрҙә яҙылышы һәм яңғырашы.
Башҡорт, татар телдәрендә - Динислам
Инглис телендә ирҙәр исеме Деннис ( Dennis) һәм ҡатын-ҡыҙ Денис ( Denise)
Француз телендә Denis — Дени.
Венгрҙар телендә Dénes — Денеш.
Португалдар телендә Dinis — Диниш.
Немец телендә Dennis — Дэннис.

2.Исемемдәге хәрефтәрҙең мәғәнәләре:
Д – аралашыусан, яғымлы
Е- тормошто һөйөүсән, һөйләшергә яратыусан, зирәк кеше
Н – үҙенең таҙалығын ҡайғыртыусан, аҡыл эйәһе
И - һиҙгер, йомшаҡ күңелле, тыныслыҡ яҡлы
С- көйһөҙ, хакимлыҡ итергә яратыусан

3.Денис исемле билдәле шәхестәр:
Денис Аблязин – гимнаст;
Денис  Глушаков — футболист;
Денис Кожухин — билдәле пианист;
Денис Соколов — мәргән атыусы;
Денис Осокин  — яҙыусы;
Денис Бүләков – башҡорт яҙыусыһы;
Денис Иван улы Фонвизин – рус яҙыусыһы;
Денис Давыдов – рус шағиры, гусар, исеме 1812 йылғы һуғыш менән бәйле.

4.Ни өсөн әсәйемдәр миңә Денис тип исем ҡушҡан?
Минең әсәйем христиан диненән, исеме Нина, шуға күрә лә ул төрлө телдәрҙә лә бер үк яңғырашлы, халыҡ-ара исемде эҙләгән. Һәм  Денис исемендә туҡталған. Был исем атайыма ла бик оҡшаған. Был исемде улар беренсе балаларына уҡ әҙерләгән булғандар. Беренсе балалары ҡыҙ булып, ә икенсегә малай тыуған. Шуға күрә улар бер нимә лә уйламыйса миңә Денис тип исем биргәндәр. Өлкән апайымдың исеме – Юлиә, һеңлемдеке Аделина, туғанымдыҡы – Данил. Бөтәһе лә интернациональ исемдәр.
5. Денис исеменең гимназияла , тыуған ауылымда  таралышы.

| № | Фамилияһы, исеме | Тыуған йылы | Класс |
|---|---|---|---|
| 1 | Денис Вадимович | 08.12.2009 | 1 |
| 2 | Шарипов Денис Рустамович | 10.03.2008 | 2 |
| 3 | Фатхулбаянов Денис Рустамович | 20.02.2007 | 3 |
| 4 | Кадиров Денис Ильдарович | 23.03.2007 | 4 |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 5 | Миннигалиев Денис Айдарович | 30.12.2005 | 5 |
| 6 | Миннимухаметов Денис Дафирович | 05.01.2004 | 7 |
| 7 | Шаймухаметов Денис Рафитович | 01.07.2003 | 7 |
| 8 | Шайхуллин Денис Илгизович | 11.09.2002 | 7 |
| 9 | Зарипов Денис Салаватович | 31.05.2001 | 9 |
| 10 | Низамов Денис Ильфатович | 07.03.2001 | 9 |
| 11 | Гильданов Денис Ильфирович | 17.01.2000 | 10 |

Тыуған ауылымда

| № | Фамилияһы, исеме | Тыуған йылы |
|---|---|---|
| 1 | Ахметов Денис Талгатович | 25.10.1986 |
| 2 | Галимов Денис Камилович | 23.08.2000 |
| 3 | Шайхуллин Денис Илгизович | 11.09.2002 |
| 4 | Фахрисламов Денис Ильшатович | 08.11.2006 |
| 5 | Рахимьянов Денис Ильшатович | 10.09.2009 |
| 6 | Валиев Денис Айдарович | 11.12.2015 |

Күреүебеҙсә ауылымда иң өлкән Денис 1986 йылда тыуған, ә иң кесеһе 2015 йылда, йылдар арауығында исемемде ҡушып торғандар, тимәк актуаллеген юғалтмаған. Бының сәбәбе, минең уйлауым буйынса, төрлө телдәрҙә лә уңайлы яңғырашы.

## IV. Йомғаҡлау.

Минең тыуған ауылым Үрмәт, Илеш районында урынлашҡан. Өләсәйемдең һөйләүе буйынса, беҙҙең яҡтарҙа бөгөнгө көндә лә бала тыуғас, уның апаһына, йәки ағаһына йөҙөнән элек аяғын күрһәтәләр. Шулай итһәң улар татыу була.Өлкәне кесеһен йәберләмәй, ҡыйырһытмай. Бала тыуғас та уны ен-шайтан алмаштырыуҙан һаҡларға кәрәк.Ҡырҡ көн үтмәйенсә, төндә утты һүндерергә ярамай. Баланы яңғыҙ ҡалдырып сыҡҡанда бысаҡ йә ҡайсы һалырға кәрәк.

Мин тыуғансы исемем әҙер булған, ә ҡыҙ булһам миңә Әдилә тип исем бирерләр ине. Денис исеме боронғо грек “Дионисиос” исеменән барлыкҡа килгән. Ул “көслө”, “еңеп сығыусы”, “тормош һөйөүсән” мәғәнәһен аңлата. Яҡындарым

менән ошондай һығымта яһаныҡ, исемем миңә тура килә, ҡылыҡ-фиғелдәремә, төҫ-башыма. Үҙемдең исемем менән ғорурланам һәм уны данларға һүҙ бирәм. “Исем кешене матурламай, ә кеше исемен матурлай” мәҡәле менән тулыһынса килешәм.

Эшемде йомғаҡлап шулай тип әйтер инем, ата-олатайҙарыбыҙ нисә быуат буйы, ҡан ҡойоп, ғүмерҙәрен биреп, халҡыбыҙҙы, телебеҙҙе, илебеҙҙе, ижадыбыҙҙы, рухыбыҙҙы һаҡлап ҡалған. Яҙмышыбыҙ киләсәге беҙҙең ҡулда. Минең исемем үҙемә бик оҡшай, “дин”, “ислам” һүҙҙәренә лә бик яҡын, әммә ул башҡорт исеме түгел. Шуныһы ғына аянислы. Бөгөнгө көндә Данил, Вадим, Руслан, Богдан, Артем исемдәрен урыҫ, сыуаш, мордва, татар, башҡорт малайҙары ла йөрөтә. Заман яңылыҡтарына ынтылып үҙ тамырҙарыбыҙҙан ситләшеп китмәйенсә, үҙебеҙҙең исемдәрҙе өйрәнәйек, киләсәк быуындарға еткерәйек. Бөйөк шәхестәребеҙ Салауат, Юлай,Ҡараһаҡал, Кинйә кеүек беҙҙең дә исемдәребеҙ ғорур яңғыраһын!

**Һығымталар:**

1.Ғилми-тикшеренеү эшен өйрәндем.

2.Тикшеренеү эше менән мин башҡорт исемдәренең килеп сығышын, мәғәнәһен, халыҡ ижадының бер төрө булараҡ “исем ҡушыу” йолаһын әҙәбиәттә ҡулланышын осраттым, йолаларҙың тәрбиәүи әһәмиәткә эйә булыуҙарына ышандым.

3.Исемемдең килеп сығышын, ҡулланылышын асыҡланым.

# Зәйнәб Биишеваның “Кәмһетелгәндәр” романында антропонимдар ҡулланылышы.

**Үрге Йәркәй беренсе гимназияһының 7-се класс уҡыусыһы Шәйхуллин Денистың проект эше**

Эшебеҙҙең темаһы: Зәйнәб Биишеваның “Кәмһетелгәндәр” романында антропонимдар ҡулланылышы.

Маҡсатыбыҙ Зәйнәб Биишеваның романында “кире” образлы ир-ат антропонимдарын анализлау.

Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, роман, хикәйә, повестар, шиғырҙар авторы Зәйнәб Биишева – милли әҙәбиәтебеҙҙең иң сағыу йондоҙҙарының береһе. Уның барлыҡ әҫәрҙәре лә халыҡсан, бай телле булыуы менән айырылып тора.

Уларҙың художестволы яҡтан камил, кешеләрҙең эске донъяһын сағылдырыуҙа тәрән психологизмлы, геройҙарҙың тапҡыр телмәрле булыуы, монолог, диалогтарҙың оҫта ҡоролоуы, персонаждарға әһәмиәтле исемдәр бирелеүе Зәйнәб Биишеваның бөйөк талантын иҫбат итә.

“Кәмһетелгәндәр” романында – кешеләрҙең фажиғәле ауыр яҙмыштары, еңелеү һәм еңеү, халыҡтың көнкүреше, көрәше, алға ынтылышы тасуирлана. Яңы үҫеш осоро әҫәре булараҡ романдағы персонаждар ҡәҙимгесә “ыңғай” һәм “кире” образдарға ғына бүленмәй, улар тормоштағыса ҡатмарлы, күп яҡлы һәм төрлө. Тәнҡит мәҡәләләре буйынса алынған образдарҙың прототиптары бармы-юҡмылығы хаҡында минең кеүек ҡыҙыҡһыныусылар күп булған. Улар халыҡҡа, үҙ заманына хас образдар. Ләкин айырым бер кешенән түгел, ә дөйөмләштереп, типиклаштырып алынғандар. Образдарына автор исемдәрҙе лә бик дөрөҫ, характерҙарына тап килтереп биргән.

Әҫәрҙә бәйән ителгән Иҫәнбәт һәм Илсеғол ауылы байҙарының, муллаларының исемдәре мине айырыуса ҡыҙыҡһындырҙы.

Исемдәр менән ҡыҙыҡһыныуымды мин үҙ исемемде өйрәнеп, тикшеренеү эшен башҡарыуҙан башланым . Үҙ исемеңде өйрәнеү - ғаиләңдең, халҡыңдың тарихын өйрәнеү. Һәр бер исемдең тәғәйенләнеше, мәғәнәһе бар. Үҙемдең исемдәр донъяһындағы белемдәремде арттырыу ниәте менән Зәйнәб Биишеваның "Кәмһетелгәндәр" романындағы антропонимдарҙы өйрәнеү буйынса ижади эш башланым.

Билдәле рус яҙыусыһы Антон Павлович Чеховтың ошондай һүҙҙәре бар: "Кешелә бөтә нимә лә - йөҙө лә, кейеме лә, тәне лә, күңеле лә матур булырға тейеш". Шуға өҫтәп әйтергә булалыр, моғайын: исемдең дә үҙ матурлығы, мәғәнәһе бар.

Матур, яғымлы, ҡолаҡҡа ятышлы исемде кем генә яратмай. Әммә шуныһы бар: кешегә үҙ исемен үҙенә һайлау мөмкинселеге бирелмәгән.Ә әҙәби әҫәрҙәрҙә был хоҡуҡ яҙыусыға бирелә. Ул персонаждың ҡылығына, төҫөнә, әҫәрҙәге ваҡиғаларға бәйләп исемдәр бирә.

Исемдәр донъяһын өйрәнеү үҙе бер фән. Кеше исемдәрен генә түгел, ә бөтә төр яңғыҙлыҡ исемдәрҙе өйрәнә торған фән бар донъяла. Ул **ономастика** тип атала.

Ономастика - лингвистик фән. Яңғыҙлыҡ исемдәрҙең формалашыу тарихын, ҡулланылышын һәм функциональ үҙенсәлектәрен өйрәнә. Ономастика фәне эҙләнеүҙәрҙә археология, тарих, матди һәм рухи мәҙәниәт, биология, психология, философия, логика, этнография өлкәләренән алынған мәғлүмәт менән байый.

Һуңғы ваҡытта эпик, драматик, лирик әҫәрҙәрҙең ономастикаһы менән ҡыҙыҡһыныу арта. Был яңғыҙлыҡ исемдәрҙең әҙәби әҫәрҙә ҡулланылыуы үҙенсәлекле һыҙаттар алыуы менән аңлатыла. Улар контексҡа ярашлы кеше, йәғни образды ғына, атап ҡалмай, ә үҙенсә әҫәр эсендә «йәшәй башлай». Һәр бер ижадсы, һүҙ оҫтаһы исемдәрҙе үҙе билдәләгән методтарға, конкрет идея-художестволы маҡсаттарға таянып ҡуллана. Улар

нигеҙендә авторҙың субъектив ҡараштары, үҙенең позицияһы, тарихи-мәҙәни үҙенсәлектәре ята.

“Кәмһетелгәндәр” романын уҡығанда мине, егет кеше булараҡ, ир-ат исемдәре ҡыҙыҡһындырҙы, ә айырыуса - байҙар, муллалар исемдәре, ҡушаматтары, фамилиялары, дөйөм әйткәндә - антропонимдар.

Антропоним (грек. anthropos- кеше, onyma - исем) — кешеләргә өндәшеү, атап мөрәжәғәт итеү өсөн хеҙмәт итә торған исем, атай исеме, фамилия, ҡушамат, псевдоним.

Зәйнәб Биишева тыуҙырған образдар ике ауылда йәшәһәләр ҙә, тормошҡа ҡараштары, үҙ-үҙҙәрен тотоштары бер төрлө, һәр береһе ниндәйҙер үҙенсәлекле индивидуаль сифаттарға эйә: Әхмәтша ҡараҡ, Шымбай ҡарт, Собхан старшина, Һатыбал, Федька Рябой (Хитров),Усман бай, Ғаббас мулла, Ҡормош бай, Әхмәҙулла мулла, кожевник Червяк, һуҡыр Сапый һәм башҡалар әҫәрҙә социаль тип ҡына түгел, ә нимәһе менән булһа ла хәтерҙә ҡалыусы йәнле үҙаллы оригиналь яҙмыш та булып тора. Тәү башлап үрҙә әйтелгән исемдәрҙе төркөмдәргә бүлеп китәһем килә:

| | |
|---|---|
| **I. Тасуири исемдәр** | Был образдар араһында юҡ |
| **II. Теләк исемдәр.** | Собхан, Әхмәтша, Ғаббас |
| **III. Арнау исемдәр** | Һатыбал, Әхмәҙулла, Усман |
| **IV. Сит телдән алынған исемдәр** | Федька Рябой, кожевник Червяк |

Әҫәрҙә бер генә исем дә осраҡлы барлыҡҡа килмәгән. Исемдәрҙә, ҡыҫҡа ғына әйткәндә, тарих биттәре сағылған. Дөйөм алғанда, башҡорт исемдәренең күпселеге ғәрәп һүҙҙәренән алынған, ғәрәп исемдәре беҙгә дин менән бергә ингән, шуға үҙләшеп киткән. Саф башҡорт исемдәре лә күп.

**Илсеғол ауылы халкы:**

**Әхмәтша (ғәр., фарс.)** — әхмәт+ шаһ Әхмәт ғәр. — иң маҡтаулы (ҡараҡ, кеше ҡулы менән икенселәренә зыян килтерергә ярата)

**Шымбай каштан –** (шыма һүҙенән алынған) ауылда байҙарҙың, муллаларҙың, старшиналарҙың иң яҡын ярҙамсыһы, халыҡ быдай кешеләрҙе борондан бирле нәфрәт менән "ҡуштан" тип атап йөрөтә. "Ҡуштан" һүҙе, күрәһең, был яҡта үҙгәреп, шундай боҙоҡ, һатлыҡ кешеләрҙең хас исеменә әйләнеп "каштан" булып киткән. Шымбай бына шундай иң шыма каштандарҙың береһе. Кипкән ҡаҙыҡ тәнле.

**Собхан ( ғәр.)** - дан, шөһрәт, маҡтау тигәнде аңлата (старшина, "Хәбирҙең башын ашап старшина булды инде ҡомһоҙ Собхан "Тәкәббер, текә ҡарашлы, ҡыҙыл елкәле, йылан кеүек йылғыр).

**Һатыбал (баш.)** — һатып + ал (баланы һаҡлау өсөн боронғо һатып алыу йолаһы буйынса ҡушылған исем); "Һатыбал! Исеменә хәтле үҙенә башҡа бит уның. Ауылда бер генә исем ул. Сөнки уны ғына, тыуғас муллаға бер ат биреп, тәҙрә үтә һатып алғандар, өҫтөнә ҡырҡ ҡораманан күлдәк кейҙереп тә йөрөткәндәр. Шунан ғына алла уны: "Был ярлы балаһы икән дә баһа. Уның кемгә кәрәге бар? Әйҙә йәшәй бирһен..."-тип алданып үлтермәй ҡалдырған. Юғиһә уға хәтле Собхан старшинаның улдары гел-гел үлеп кенә торғандар. Ә быныһы шулай һатып алып, "Һатыбал" тип исем ҡушҡас ҡына йәшәгән. Бына бит ул ҡәҙерле балалар нисек булалар!?", рус-башҡорт училищеһында уҡый, ялҡаулығы арҡаһында һәр класта икешәр йыл ултыра, үҙ ауылында аҡтар отрядының башлығы.

**Федька Рябой (грек)**- Хоҙай биргән мәғәнәһенә эйә (атаһы- Сергей ҡарт- Мраковканың ғәжәп ҡомһоҙ, ҡаты бәғерле байҙарының береһе, фамилияһы – Хитров, “...тәңкә ҙурлығы эре һары шаҙра менән ҡапланған быжыр битле, ағы әйләнеп, ҡан һауып торған сәгер күҙле офицер, ҡанһыҙлығы, кешелекһеҙлеге менән дан тота, кешене атып үлтереү ҙә уның өсөн бер ни түгел...”)

**Усман (ғәр.)** — ирлек, батырлыҡты аңлата (боронғо гәрәй хәлифенең исеме; тарихи сығанаҡтарҙа Ғосман формаһында ла осрай), әҫәрҙә бай, үҙ ҡул көсө менән көн күреүсе урта хәлле кеше, яҡшы, үтә йомарт күңелле итеп һүрәтләнә, баҙарҙан ҡайтҡанда бала кеүек шат, баһадирҙарса дәү кәүҙәле булыуға ҡарамаҫтан, нәҙек, сыйылдыҡ тауышлы, балаларға манпас кәнфиттәр өләшергә ярата. Бик үк бай булмаһа, халыҡ “бай” тип өндәшә, бәлки йомарт күңелле булғанға.

**Ғаббас (ғәр.)** — һуғышсан, көрәшсән, яусыл мәғәнәһендә (мулла, үҙ туғанын үлтереүҙә булышлыҡ итә, хатта зыяратҡа ерләргә рөхсәт бирмәй, сүплектә ерләттертә, байҙар менән бергә күңел асып, кеше ҡыйнауҙа ла ҡатнаша, дин әһеленә килешмәгән ҡылыҡтары күп). Шыуғалаҡ, яуыз, мут кеше, бөтә яҡҡа ла ярай белә, аҡты ҡара, ҡараны аҡ, тип раҫлай, кеше ҡулы менән зыян ҡыла.

**Ҡаҙан ҡорһаҡтар** - Собхан старшинаны, Ғаббас мулланы, Шымбай ҡарттарҙы “ҡаҙан ҡорһаҡтар” тип йөрөтәләр (сөнки старшина итеп гел, үгеҙ елкәле, ҡаҙан ҡорһаҡлы кешеләрҙе һайлағандар).

**Иҫәнбәт ауылы халҡы**

**Ҡарамыш (баш.)** (халыҡ телендә - Ҡормош бай) —– ҡараны, килде тигән һүҙҙәрҙән барлыҡҡа килгән (“...ҡомһоҙ-ҡомағайлыҡ,

һаранлыҡ менән...”,“Ҡормош бай ата күркә кеүек” ҡомһоҙлоғо арҡаһында “Ҡормош” тигән ҡушамат тағыла, йыуан ҡорһаҡлы, ҡанһыҙ кеше).

**Әхмәҙулла (ғәр.)** — мосолман, дин әһеле тигәнде аңлата (мулла,Сәғүрә еңгәнең үлемен тиҙәйтә, ауыл халҡын “иманһыҙ, мөртәт”, тип атай, сәрелдәк тауышлы, бик ҡомһоҙ, салыш күҙле, шаҙра менән йырғыланған ҡып-ҡыҙыл арыҡ йөҙлө, ырғаҡ кеүек кәкере оҙон бармаҡлы, ҡарсыға суҡышы һымаҡ көмөр танаулы, үҙен изге күңелле, алланың бөтә серле эштәренә төшөнөүсе аҡыл эйәһе итеп күрһәтергә тырыша)

**кожевник Червяк (Червяков) (рус)**–фамилияһы ҡушаматтан барлыҡҡа килгән, сибек кәүҙәле, эшһөйәр кешегә әйткәндәр (Ҡормош байҙың белеше, уларҙа баҙар көндә гел ҡунаҡ була).

**һуҡыр Сапый** – башҡорт исемдәре араһында осрамай. Рус телендә “Тихой сапой” фразеологик берәмек йәшәй - аҫтыртын, йәшертен, һиҙҙермәҫтән тигәнде аңлата, икенсе варианты - ҡушамат, “... күрмәһә лә күрҙем, ишетмәһә лә, ишеттем, тип ҡул тамғаһын һуға” , ялған доносты дөрөҫләп судҡа шаһит булып йөрөй. Уның күҙе лә тиктәҫкә генә түгел, ялған ант иткәнгә һуҡырайған тип, баралар, ярлы-етемде рәнйетә, тома һуҡыр, ике ҡатыны бар.

Кешенең исеме есеменә тура килергә тейеш тигән һүҙ халыҡ телендә киң таралған. Ә “Кәмһетелгәндәр” романындағы образдарҙың исемдәре есемдәренә тура киләме, тигән һорау миндә лә тыуҙы. З.Биишева тыуҙырған һәр бер образды күҙаллап сыҡҡандан һуң ошондай һығымталарға килдем:

| № | Исеме, ҡушаматы, фамилияһы | Мәғәнәһе | Исеме есеменә: | |
|---|---|---|---|---|
| | | | Тура килә | Тура килмәй |
| 1 | Әхмәтша (исем) | иң маҡтаулы | | + |
| 2 | Шымбай (ҡушамат) | шыма һүҙенән алынған | + | |
| 3 | Собхан (исем) | дан, шөһрәт, маҡтау | | + |
| 4 | Һатыбал(исем) | һатып + ал | + | |
| 5 | Федька Рябой | “...эре һары | + | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | (ҡушамат) | шаҙра менән ҡапланған быжыр битле...” | | |
| | Фёдор (исем) | Хоҙай биргән | | + |
| | Хитров (фамилияһы) | мут, хәйләкәр, хәйләле | + | |
| 6 | Усман (исем) | ирлек, батырлыҡ | + | |
| 7 | Ғаббас (исем) | һуғышсан, көрәшсән, яусыл | + | |
| 8 | Ҡормош (ҡушамат) | ҡомһоҙ-ҡомағайлыҡ, һаранлыҡ | + | |
| | Ҡарамыш (исем) | ҡараны, килде | + | |
| 9 | Әхмәҙулла (исем) | мосолман, дин әһеле | | + |
| 10 | кожевник Червяк (фамилия) | сибек кәүҙәле, эшһөйәр | + | |
| 11 | һуҡыр Сапый (ҡушамат) | аҫтыртын, йәшертен | + | |
| 12 | Ҡаҙан ҡорһаҡтар (ҡушамат) | Ҡорһаҡтары ҙур, кеше таларға яратыусан | + | |

Күреүебеҙсә, Зәйнәб Биишева әҫәрендә геройҙарҙың исемдәре, нигеҙҙә, башҡорт, шул иҫәптән боронғо башҡорт исемдәренә генә ҡайтып ҡына ҡалмай, ә ғәрәп, рус телдәренән дә алына. Был исемдәр геройҙың булмышын, характерын, эске донъяһын асыу сараһы булып тора. Тимәк, был романдың антропонимик культураһы сағыштырмаса юғары. Күрһәтелгән

ун биш (15) антропонимдың дүртеһе (4) генә мәғәнәһенә тура килмәй. Әлбиттә, бөтә ҡағиҙәнең дә айырмаһы була.

Шулай итеп, “Кәмһетелгәндәр” романында исемдәр, ҡушаматтар хәл-ваҡиғаларға тәрәнерәк үтеп инергә, кеше характерын тулыраҡ асырға ярҙам итә. Ошонан сығып үҙемә һығымталар яһаным:

- әҫәрҙә исемдәр специфик роль уйнай;
- авторға ысынбарлыҡты күрһәтеүҙә ярҙам итә;
- милли исемдәрҙең ономастикаһын аса;
- автор тарафынан һайланған исем уҡыусыға эмоциональ яҡтан ҙур йоғонто яһай;
- әҫәрҙең структураһына ингән исемдәр, ҡушаматтар уның йөкмәткеһе менән тығыҙ бәйләнештә тора.

Ижади эшемдең ахырында әйтеп үтәһем килә, кеше исеме – ул иң тәүҙә һүҙ. Һәр һүҙ кеүек үк, ул да тел ҡанундарына, ҡағиҙәләренә буйһона. Уны кешегә ғүмерендә иң күп ишетергә тура килә. Һәр һүҙ, билдәле булыуынса, айырым өндәрҙән тора. Ә һәр өн – үҙ йышлығы булған тулҡын. Төрлө тулҡындар кешегә төрлөсә тәьҫир итә. Ябай ғына итеп әйткәндә, ошо бер һүҙ, үҙенә генә хас әйтелеше, аһәңе менән дә кешенең яҙмышын билдәләй. Хатта бер генә кешенең түгел, уның тирәһендәге башҡаларға ла йоғонто яһай. Хәҙерге тел менән әйткәндә, исем – ул яҙмыштың формулаһы, тормош программаһы. Ул кешегә ғүмере буйына эйәреп йөрөй һәм уны бетеү урынына һаҡлап йөрөтә. Кеше үҙен донъяла исем менән таныта.

”Әҙәм күрке-сепрәк, тиеп әйтһәләр ҙә,
Әҙәм күрке барыбер ҙә исемдер ул;
Үҙе матур, йөҙө матур, һүҙе матур –
Исеменә тура килгән есемдер ул.”

Тип яҙа Рәшит Шәкүр. Мин дә был һүҙҙәр менән тулыһынса килешәм. Ысынлап та, һәр кешенең исеме есеменә тура килергә тейеш, был тормоштоң ҡануны.

Йөкмәткеһе


**Баш һүҙ**.................................................................................3 бит

**Әҙәбиәт – ул изгелек донъяһы**..................................................5 бит

**Ғилем өләшкәндән кәмемәй, арта ғына бара**
Оҫталыҡ дәресе.......................................................................... 7 бит
**Дәрес – уҡытыу процесының тере бер күҙәнәге ул.**
Ноғман Мусиндың "Һунарсы хикәйәләре"нә ингән әҫәрҙәре буйынса йомғаҡлау дәрес (4-се класс)..........................................12 бит
Туған телем – үҙ телем, ҡайҙа барһам – үҙ көнөм
(5-се класта Баязит Бикбай ижадын өйрәнеү)...............................19 бит
Ғайса Хөсәйеновтың "Һуңғы тарпан" хикәйәтен өйрәнеү
(8-се класс, башҡорт теле)........................................................... 23 бит
Һәҙиә Дәүләтшина – рух баһадиры. (10-сы класта башҡорт теле дәресендә Һәҙиә Дәүләтшинаның тормош һәм ижад юлы менән танышыу)........................................................................................27 бит
Рәшит Ниғмәтиҙең "Һакмар ҡыҙы" поэмаһында хеҙмәт кешеһе образы (10-сы класс)..................................................................39 бит
**Белем һәм тәрбиә.**
Класс сәғәте "Әсәй -мәңге һүнмәҫ ҡояшым!" (9-сы класс).........47 бит
Класс сәғәте "Илеш йырсыһы"(11 класс)................................. 51 бит
**Китап уҡыу – тормошто өйрәнеү**.
Китап уҡыусылар конференцияһы "Бәхетле булһын баласаҡ"
(Айгиз Баймөхәмәтовтың "Калдырма мине әсәй" повесы буйынса)......................................................................................58 бит
**Уҡыусыларымдың ижад шишмәһе**.
Фәнни-тикшеренеү эш "Исемдәр донъяһында минең исемем"........................................................................................66 бит
"Зәйнәб Биишеваның "Кәмһетелгәндәр" романында антропонимдар ҡулланылышы" темаһына ижади проект....................................74 бит


У ЧИТЕЛЬ ГО
2015


Бишенсе декабрь